ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

24-30 март (буранай) 2018

№ 12 (794)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Кино тарих түгел...**



3

**Тотороҡлолоҡ һайланыҡ**



4

**Әхмәтзәки Вәлидиҙең**

билдәһеҙ фотографияһы



8-9

**Уҡыусы әҙер булмайынса,**

уҡытыусы килмәй ул...



12-13

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 31 мартҡа тиклем 2018 йылдың икенсе яртыһы өсөн ваҡытынан алда элекке хаҡтар менән яҙылыу бара. Йәғни һеҙ ай аҙағына тиклем 50665 индексты "Киске Өфө"гә 554 һум 82 тингә яҙыла һәм квитанцияғыҙҙы редакцияға ебәреп, Рәми Ғариповтың "Сыңрау торна", Варис Ғүмәровтың "Тыуған яҡтың шифалы үсемлектәре", Йәүҙәт Бәшировтың "Башҡорт хан", Илгизәр Диҡкәттең "Башҡорт көсө", Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан йыры" һәм башҡа китаптарға эйә була алаһығыҙ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Башҡортостан автономияһын яулаған шәхестәребеҙ хаҡында низәр беләһегеҙ?

***Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ, филология фәндәре докторы, академик, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, С. Юлаев исемендәге республика дәүләт премияһы лауреаты:*** Ундай шәхестәребеҙ араһынан XX быуат башындағы башҡорт азатлыҡ хәрәкәтенең төп идеологы һәм юлбашсыһы, Башҡортостан автономияһына нигеҙ һалыусы, шуның менән Рәсәйҙең федератив дәүләт булараҡ үсеш алыуына ҙур йоғонто яһаған алдан күреүсе зирәк сәйәсмән Әхмәтзәки Вәлиди хаҡында белмәгән кеше юҡтыр. Шул уҡ ваҡытта ул башҡорт милли хәрәкәтенең генә түгел, Көнсығыш халыҡтарының да үҙбилдәләнеш өсөн көрәш башында торған абруйлы идеолог һәм милли-революцион рухлы демократ. 2000 йылда ошо бөйөк шәхесебеҙ хаҡында "Башҡорт энциклопедияһы" ғилми нәшриәтендә 3 мең дана тираж менән минең "Әхмәтзәки Вәлиди Туған" тигән тарихи-биографик монографиям баҫылып сыҡҡайны, уны шунда уҡ һатып алып та бөттөләр. Улай ғына ла түгел, әле булһа эҙләп, һорап йөрөүселәр күп был баҫманы. Дөрөҫ, әйҙә эҙләһендәр, табып алып уҡыһындар, зыялы шәхесебеҙ хаҡында күберәк белһендәр, тигән маҡсатта яҙылғайны бит ул. Унда Әхмәтзәки Вәлидиҙең "Хәтирәләр" китабына, башҡа хеҙмәттәренә таянып, бөйөк шәхесебеҙҙең тормош юлынан башлап, сәйәси эшмәкәрлеге, унан ҡала Төркиәләге тормошо, ғилми-ижади эш даирәһе хаҡында бәйән ителә. Күп ҡаршылыҡтар һәм ҡорбандар аша яулап алынған Башҡорт автономиялы республикаһының хоҡуҡтары һәм вәкәләттәренең Совет власы тарафынан асыҡтан-асыҡ ҡыҫымға һәм сикләүҙәргә дусар ителеүе арҡаһында Ә. Вәлиди илде ташлап китергә мәжбүр булғас, ул сәйәсәттән баш тартып, үҙен тулыһынса ғилем донъяһына бағышлай һәм бөтә донъя күләмендә танылған энциклопедик типтағы ҙур ғалим булып үҫешә. Иң беренсе нәүбәттә ул шулай ҙа тарихсы, төрки халыҡтары тарихы һәм мәҙәниәте белгесе һәм шул уҡ ваҡытта - шәрҡиәтсе, көнсығыш фәне, Ислам тарихы ғилем эйәһе; байтаҡ телдәр белгән: ғәрәпсә, фарсыса, немецса, французса, төрөксә иркен аралашҡан һәм яҙышҡан полиглот. Монографияның күләмле генә 2-се бүлеге "Сәйәси көрәш майҙанында" тип атала һәм уның йөкмәткеһе Ә. Вәлидиҙең ижтимағи-сәйәси эшмәкәрлегенә арналып, тап әле һеҙ ҡуйған һорауға яуап булып тора ла. 1915 йылға тиклем, йәш булыуына ҡарамаҫтан, ғилми даирәлә шөһрәт ҡаҙанған "Төрк тарихы" тигән китабын сығарып, Төркөстанға ике ғилми сәйәхәт ҡылып, Санкт-Петербург Фәндәр академияһында ошо турала хисап тотоп, билдәле академиктар Бартольд менән Радловтың фатихаһын алып өлгөрә. Февраль революцияһы башланыу менән Вәлиди көрәш майҙанына атлыға. Инҡилаптан файҙаланып, Рәсәйҙә демократик йөмһүрәит төҙөү яҡлылар ҡалҡып сыға, ә Әхмәтзәки Вәлиди һәм уның ҡараштарын уртаҡлашыусылар ерле йөмһүриәттәр федерацияһын алға һөрә. Ана нисек Вәлиди баштан уҡ үҙ платформаһын ап-асыҡ билдәләй!

**(Дауамы 2-се биттә).**

ЯҢЫ РУБРИКА: "УҠЫУСЫНАН УН ҺОРАУ"

## МӨХТӘРӘМ ЙӘМӘҒӘТ!

Гәзитебеҙ биттәрендәге рубрикаларҙың яңырып тора икәнен беләһегеҙ. Ҡайһыһындыр заман тыуҙыра, ҡайһыһындыр уҡыусылар тәҡдим итә. Бына әле лә Әбйәлил районының Һәйетҡол ауылында йәшәүсе әүҙем уҡыусыбыҙ, ихтирамлы ағинәй, данлыҡлы ҡобайыр башҡарыусы Вәсилә апай Садиҡова **"Уҡыусынан ун һорау"** тигән рубрика булдырырға тәҡдим итте һәм үҙенең йәшәйешебеҙҙең көнүҙәк проблемаларына арналған ун һорауын яҙыусы, журналист Әхмәр Ғүмәр-Үтәбайға төбәне. Шул әңгәмәбеҙҙе гәзитебеҙҙең киләһе һанында уҡырһығыҙ һәм үҙегеҙ ҙә яуабын таба алмаған, күңелегеҙҙе өйкәп торған һорауҙарығыҙға яуапты ниндәйҙер яҙыусыға, шағирға, журналисҡа, сәйәсмәнгә йә башҡа һөнәр эйәһенә төбәй алаһығыҙ. Беҙҙең бурыс - һеҙ ебәргән ун һорауҙы адресатҡа еткереп, һеҙҙең икәүара әңгәмәне гәзиттә баҫтырып сығарыу. Әйҙәгеҙ, әүҙемерәк булығыҙ!

АФАРИН!

# ЕҢЕҮ ЯУЛАУ ӨСӨН...

## көс һалырға кәрәк шул

**Ошо көндәрҙә баш ҡалала "Шаяниум-2018" шаяндар һәм отҡорҙар ҡала конкурсының финал уйыны үтте. Ун алтынсы тапҡыр ойошторолған был бәйгелә быйыл бөтәһе илле команда ҡатнашҡан, шуларҙың ҡырҡ икеһе уҡытыу урыҫ телендә алып барылған белем усаҡтарынан булған. Финал уйынына һайлап алынған иң яҡшы ете команда үҙенең сығышын Ғаилә йылына ишаралап, "Ояһында ни күрһә, осҡанында шул булыр" тигән темаға арнаны.**

**(Дауамы 5-се биттә.)**



Еңеүселәр - "Башҡорттар.ru" командаһы.

12+

**✓ Ағаһы Ғиниәтулланан башҡа Һиҙиәтулла олатайҙың тағы ла ҡустыһы Сәхиулла, һеңлеләре Ғәйникамал менән Миңлекамал була. Ҡартатайым Сәхиулла Сибәғәтулла улының ҡыҙы Наилә - минең әсәйем.**



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Башҡортостан автономияһын яулаған шәхестәребеҙ хаҡында ниҙәр беләһегеҙ?

**(Башы 1-се биттә).**

Башҡортостандың үҙаллы мөхтәриәте мәсьәләһе Башҡорт ҡоролтайҙарында күтәрелә һәм Вәлидиҙең бөтөн күңелен, уй-хыялын ялмап ала. Шул уҡ ваҡытта ул Төркөстандағы, Ҡаҙағстандағы, Башҡортостандағы ерле мөхтәриәт хәрәкәттәрен бер-береһенән айырмай, ҡушып алып барыу яғында, ләкин күрә: Төркөстанда Советтар хакимиәте урынлашыу ихтималлығы ҙур. Вәлиди Башҡорт шураһы эштәре, Башҡортостан мәсьәләләре менән бәйле баштан аяҡ сәйәси донъяға сума. Ни тиклем белемле, сәйәси әҙерлекле һәм эшлекле булмаһын, Ә. Вәлиди ошо осорҙағы оло эштәрҙе бер үҙе генә башҡара алмаған да булыр ине. Башҡорт милли хәрәкәтен ул алдынғы милли интеллигенция вәкилдәре, иң яҡын арҡаҙаштары: Шәрифйән Манатов, Юныс Бикбов, Сәғит Мирасов, Харис Йомағолов, Хәбибулла Ғәбитов, Муса Мортазин, ялҡынлы шағирыбыҙ Шәйехзада Бабич һәм башҡа бик күп иптәштәре менән киң йәйелдереп ебәрә һәм улар бер сафта Октябрь революцияһы ваҡиғаларына килеп инәләр. 1917 йыл эсендә генә лә (июль, август һәм декабрь айҙарында) I, II, III Бөтөн Башҡорт ҡоролтайҙары үткәрелә. Өсөнсө Башҡорт ҡоролтайы, Башҡорт автономияһын ҡанунлаштырып, үҙаллы хөкүмәт төҙөй һәм милли ғәскәр ойоштороуҙы башлап ебәрә. Ә. Вәлиди был ваҡытҡа инде башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең юлбашсыһы булып таныла. Граждандар һуғышы осоронда ул - Башҡорт ғәскәренең баш сардары, 1919 йылдың мартында Башҡорт хөкүмәтенең Үҙәк Совет власы менән килешеүе нигеҙендә Башҡорт Автономиялы Совет Республикаһы төҙөлгәндән һуң - хәрби комиссар, Башревком рәйесе. Ләкин артабан ваҡиғалар икенсе төрлөрәк йүнәлеш ала: Башҡорт совет автономияһы хоҡуҡтарын сикләү, Дәүләт килешеүен юҡҡа сығарыу тураһында Мәскәүҙә бер яҡлы йәшерен тиерлек документ әҙерләнеүе асыҡлана. Ул ғына ла түгел, Башҡортостан мәсьәләһе хаҡында үҙәктә махсус комиссия эшләүе лә мәғлүм була. Мәгәр Вәлиди теләһә ниндәй хәлдәрҙә лә бөгөлөп төшөр зат түгел. Яулаған мөхтәриәтте яҡлап, Үҙәк менән төҙөлгән Килешеүгә таянып, комиссия ағзалары менән бәхәсләшә, дәғүәләшә, элекке Килешеү нигеҙен яҡлап, Лениндың үҙе менән дә хатта бер нисә тапҡыр осрашып һөйләшеп ҡарай, ләкин Совет власы, маҡсатҡа ирешеү өсөн теләһә ниндәй сара ла яҡшы, тигән принцип менән эш итә. Башҡорт автономияһы өсөн көрәштә тейешле һөҙөмтәгә өлгәшә алмағас, ярым-йорто мөхтәриәт идеяһы, большевистик диктатура менән килешмәйенсә, Әхмәтзәки Төркөстанға сығып китә. Сит илдәргә сығып китер алдынан уның башҡорт халҡына, үҙенең арҡаҙаштарына, В.И. Ленинға яҙған хаттары һәр кемебеҙгә билдәле. Шуға ла уларға туҡталып тормайынса, Үҙәк Комитет сәркәтиптәре һәм Политбюро ағзалары Крестинский менән Преображенскийға яҙған хаттарынан ошо өҙөктө килтереү генә лә Әхмәтзәки Вәлидиҙең алдан күрә белгән, объектив һәм принципиаль ҡарашлы бөйөк сәйәсмән булғанлығын аңларбыҙ: "...Эскерле, ике йөҙлө диктаторҙың (һүҙ Сталин хаҡында бара, 1920 йыл - **Ред.**) кеше яҙмышы һәм ихтыяры менән намыҫһыҙ уйнауы... партия эсендә ҡот осҡос террор баш күтәрәсәге хаҡында асыҡ һөйләй. Бер көн һеҙҙең дә баштарығыҙ осмаһын, тип ҡурҡам..." (Ә.Вәлиди "Күрәҙәлек итә тимәгеҙ..."). Ни тиклем борсолоулы, аяныслы, әммә хаҡ һүҙҙәр! Иҫкәрткән был фекерҙәштәренең баштары ун өс йылдан һуң ысынлап та террор ваҡытында оса, Ә. Вәлиди үҙе уттар-һыуҙар, яуҙар кисеп, иҫән ҡала. Сит-ят ерҙәрҙә ауыр һәм билдәһеҙ оҙон юлдар яңы башлана ғына әле уның өсөн. Кире бер ҡасан да иленә әйләнеп ҡайта алмаҫ яҙмыш юлдары...



***Наил ҒӘЙЕТБАЕВ, драматург, прозаик:*** Башҡортостан автономияһы өсөн изге көрәш юлында йәшләй генә ғүмерен фиҙа ҡылған атаҡлы шағир Шәйехзада Бабич Башҡорт үҙәк шураһының һәм хөкүмәтенең үҙәк фигураларының береһе була. Быйыл "Ағиҙел" журналының 6-сы һанында Бабич тураһында романым баҫыла башлаясаҡ. Унда шағирыбыҙҙың тап ана шул автономия өсөн көрәш йылдарындағы эшмәкәрлеге һәм ижады тураһында тулыраҡ бәйән ителә. 1917 йылдың авгусында Өфөлә үткән II Башҡорт ҡоролтайы ерле мөхтәриәтте нығытыуға бәйле ҡарарҙар ҡабул итә. Был арала Октябрь революцияһы булып, власть большевиктар ҡулына күсә. Ифрат ҡатмарлы был осорҙа маҡсаттарҙы тағы ла аныҡлабыраҡ билдәләү кәрәклеге килеп тыуа. Шунлыҡтан, декабрҙә Ырымбур ҡалаһында Каруанһарай бинаһында III Бөтөн Башҡорт ҡоролтайы асыла. Көн тәртибенә милли, ер, аҙыҡ-түлек, финанс, Башҡортостан идараһы, ғәскәр ойоштороу, мәғариф эштәре кеүек иң мөһим тиҫтәнән ашыу мәсьәлә индерелә, шул уҡ ваҡытта был ҡоролтай Башҡорт автономияһын ҡанунлаштырып, үҙ аллы хөкүмәт төҙөй. Ул, шулай итеп, Рәсәйҙә бына-бына граждандар һуғышы ҡабынып китергә торған киҫкен осорҙа төҙөлә. Мөхтәриәт идеяһына ҡаршы көстәр ҙә күп була. Был ваҡытта "Башҡорт" гәзитендә азатлыҡ рухы менән һуғарылған, ирекле Башҡортостанға дан йырлаған шиғырҙары менән йыш сығыш яһаған, йырсы һәм композитор Ғәзиз Әлмөхәмәтов менән концерттар ойоштороп йөрөгән Шәйехзада Бабич киң йәмәғәтселектә ҙур популярлыҡ менән файҙалана. Әхмәтзәки Вәлиди Бабичтың ошо сифатын кәрәкле мәлендә бик оҫта файҙалана: мөхтәриәткә ҡаршы ҡайһы бер кешеләр тураһында шиғырҙар яҙҙыра. Үткер телле, ялҡынлы шағирҙың оло йыйын алдындағы сығышы делегегаттарға тәьҫир итмәй ҡалмай, әлбиттә. Йәш кенә булыуына ҡарамаҫтан, Шәйехзада шиғри таланты менән генә түгел, белемле булыуы, сәйәси һиҙгерлеге, ойоштороу һәләте менән дә айырылып торған өлгөрөп еткән шәхес була. Уны мәркәз шураһына сәркәтип итеп һайлайҙар. Бер осор ул хатта шура рәйесе вазифаһын да башҡарып ала. Ғөмүмән, буталсыҡ осорҙа халыҡҡа шиғри тел менән аңлайышлы һәм күңелгә ятышлы, ышаныслы итеп Бабич дөрөҫ йүнәлеш табырға ярҙам итә. Мәҫәлән, тәүҙәрәк Колчак Башҡорт дәүләтселеген хуплағанлыҡтан, башҡорт ғәскәре аҡтар яғында һуғышырға мәжбүр булһа ла, аҙаҡ бының мәкергә ҡоролған хәйлә икәнен аңлаған Башҡорт хөкүмәте, большевиктар барса милләттәргә үҙаллылыҡ вәғәҙә иткәс, ҡыҙылдар яғына сығырға ҡарар итә. Был турала Шәйехзада Бабичтың "Башҡорт халҡына көйлө хитап"(1919) тип аталған күләмле шиғри әҫәре ошо хәлде икеләнгән халыҡ аңына теләһә ниндәй агитацияға ҡарағанда ла аңлайышлы һәм ышандырырлыҡ итеп, хәҡиҡәт булараҡ еткереүгә өлгәшә. Һәм башҡорттар тулыһынса ҡыҙылдар яғына сыға.

***Лиана ЮНЫСОВА, эшҡыуар, Ишембай ҡалаһы:*** Мин Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең күренекле эшмәкәрҙәренең береһе Һиҙиәтулла Сибәғәтулла улы Сәғәҙиев нәҫеленән булам һәм бының менән ғүмерем буйы ғорурланам, өлкән олатайым өлгөһөндә йәшәргә, эшләргә тырышам. Һиҙиәтулла олатайым - минең ҡартатайым Сәхиулланың бер туған ағаһы, Ишембай районының Тирмән-Йылға ауылында 1887 йылда тыуа. Ғаиләләре ишле генә була. Ағаһы Ғиниәтулланан башҡа Һиҙиәтулла олатайҙың тағы ла ҡустыһы Сәхиулла, һеңлеләре Ғәйникамал менән Миңлекамал була. Ҡартатайым Сәхиулла Сибәғәтулла улының ҡыҙы Наилә - минең әсәйем. Һиҙиәтулла Сәғәҙәтов 16 йәшендә генә Ҡаҙан ҡалаһына барып, "Мөхәмәҙиә" мәҙрәсәһендә белем ала. 1911 йылда мәҙрәсәне тамамлағас, тыуған яғына ҡайтып, революцияға тиклем балалар уҡыта. 1917 йылда Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә әүҙем ҡушылып китә. Юрматы кантон округы шураһына һайлана, уның йыйынында ҡатнаша, башҡорт ғәскәрҙәре составында төрлө һуғыштарҙа йөрөй.1919 йылда Башревком ойошторолғас, уны башҡорт сәйәси кадрҙарын әҙерләү маҡсатында 30 кеше менән бергә Мәскәүгә уҡырға ебәрәләр. Унан ҡайтҡас, Сәғәҙиев Башҡорт кавалерия дивизияһының Сәйәси бүлек начальнигы итеп тәғәйенләнә, башҡорт ғәскәрҙәре менән Петроградты аҡтарҙан һаҡлауҙа ҡатнаша. Мәскәүҙең Башҡорт автономияһына ҡарата сәйәсәте менән риза булмай, Әхмәтзәки Вәлиди көрәште артабан дауам итеү өсөн Башревком ағзалары менән Төркөстанға сығып киткәс, республиканың яңы етәкселеге Һиҙиәтулла Сәғәҙиевты Мәғариф коллегияһы ағзаһы, аҙаҡ БАССР-ҙың Халыҡ мәғарифы комиссары итеп тәғәйенләй. Бында ике йыл эшләгәс, Мәскәүҙә юридик курста белемен камиллаштырып ҡайта һәм Башглавсудта эшләй башлай. Был осорҙа ул милли хәрәкәттә ҡатнашҡандары өсөн хөкөмгә тартылған иптәштәренә, таныштарына хәленсә ярҙам итергә тырыша, яҡлап сығыш яһай. Шуның өсөн партия өлкә комитетынан шелтә лә ала. Үҙенең дә баш осонда болоттар ҡуйырыуын һиҙеп-күреп йөрөй, шунлыҡтан ғаиләһе менән Ҡырғыҙстанға күсеп китә, ләкин надзор органдары уны бында ла килеп таба. 1937 йылдың авгусында ул ҡулға алынып, Мәскәүгә оҙатыла һәм ике айҙан атып үлтерелә... Тәлғәт, Үзбәк, Тойғон исемле улдары менән Фирҙәүес исемле ҡыҙы "халыҡ дошманы балалары" мөһөрөн күтәреп, етем тороп ҡалһалар ҙа, береһе лә хур булмай. Гендар ныҡлығы ҡурсый, тырышлыҡ, белемгә, яңылыҡҡа ынтылыштары ғына түгел, атай тәрбиәһе һәм уның шәхси өлгөһө лә кеше итә уларҙы: бөтәһе лә юғары белем алып, ҙур урындарҙа, яуаплы етәксе вазифаларҙа эшләйҙәр. Үкенескә, әлеге көндә улар беҙҙең арала юҡ инде, Үзбәк туғаныбыҙҙың Нарс исемле улы - Һиҙиәтулла бабайыбыҙҙың ейәне ситтә йәшәһә лә, уның менән аралашып торабыҙ. Оло шәхесебеҙ - Башҡортостан тарихына исеме мәңгелеккә алтын хәрефтәр менән уйылған Һиҙиәтулла Сәғәҙиевтың нәҫел тамырҙары иҫән - беҙҙең өсөн ул тормошобоҙ маяғы булып, гел генә артылыштарға, еңеүҙәргә әйҙәп тора.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Граждандарҙы ҡабул итеү барышында Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитовҡа Бөрөлә йәшәүсе Вера Цирульникова мөрәжәғәт итте. Ул ҡалала ҙур перинаталь үҙәк төҙөү кәрәклеге хаҡында һөйләне. Уның һүҙҙәренсә, ҡулайлаштырылған иҫке бинала урынлашҡан урындағы бала табыу йорто Башҡортостандың төньяғындағы биш район халҡын хеҙмәтләндерә һәм ғәмәлдә туп-тулы. Палаталарҙа тығыҙ, медицина персоналдарына эш йөкләмәһе юғары. Республика етәксеһе Бөрөлә перинаталь үҙәк төҙөлөшө хаҡында ҡарар ҡабул ителеүен, оҙаҡламай проект эштәре башланыуын хәбәр итте.

✓БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың сираттағы 51-се ултырышында Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитовтың Хөкүмәттең уҙған йылдағы эш һөҙөмтәләре хаҡында отчеты тыңланды. Билдәләнеүенсә, Башҡортостанда төп макроиҡтисади күрһәткестәр йәһәтенән ыңғай үҫеш күҙәтелгән, финанс тотороҡлолоғо һаҡланған. Хөкүмәт эшмәкәрлеге лә граждандарҙың тормош сифатын күтәреү, социаль шарттарҙы яҡшыртыу, хеҙмәт баҙарындағы хәлдәрҙе көйләү кеүек мәсьәләләргә йүнәлдерелгән.

✓2018 йылда Башҡортостанға бюджет хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡын арттырыуға федераль ҡаҙнанан 790 миллион һумдан ашыу дотация бүленә. Тейешле бойороҡ Рәсәй Хөкүмәте сайтында баҫылған. Был 2018 йылдың 1 майынан минималь хеҙмәт хаҡын 11,163 мең һумға тиклем арттырыуға бәйле. Ил төбәктәренә бөтәһе 20 миллиард һум йүнәлтелә. Аҡса резерв фондынан бүленә.

✓1 апрелдән Өфө-Инйәр-Яңы Абҙаҡ маршруты буйынса хәрәкәт иткән "Урал легендалары" ҡала яны поезы йөрөмәй. Башҡортостан ҡала яны пассажирҙар компанияһының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, был тау саңғыһы миҙгеле тамамланыуға бәйле. "Урал легендалары" электр поезы 2017 йылдың ноябрендә йөрөй башланы. Электричка республикалағы популяр тау саңғыһы курорттарына тиклем бара ине. Ошо йүнәлеш буйынса әүәлгесә көн һайын Шаҡша-Дим-Инйәр электричкаһы йөрөй.

✓Башҡорт дәүләт университеты студенттары өсөн ике яңы дөйөм ятаҡ төҙөргә күҙаллай. Заманса кампустар юғары уҡыу йортоноң төп корпусына яҡын урынлашасаҡ. Блок системаһы менән 560 урынлыҡ ҡунаҡхана тибындағы биш ҡатлы беренсе дөйөм ятаҡты - 2020 йылға, икенсеһен 2025 йылға төҙөү күҙаллана, тип асыҡлыҡ индерҙе БашДУ ректоры Николай Морозкин.

КИЛЕШМӘЙЕМ!

# КИНО ТАРИХ ТҮГЕЛ...



**Беренсе каналдан "Алтын Урҙа" киносериалы бара һәм уны күптәр йотлоғоп ҡарай. Интернет селтәрҙәрендә лә был фильм хаҡында ҡыҙыу бәхәстәр бара, бигерәк тә төрки халыҡтары сайттары бик әсе тәнҡит менән сығыш яһай.**

Бында бәлә нимәлә? Тамашасының кино менән тарихты бутауында. Фильмды ҡараусылар тарихи факттарға таянып төшөрөлгән йә булмаһа тарихи исем күтәргән әҫәрҙе мотлаҡ тарихтың үҙе икән тип ҡабул итә. Ә, асылда, фильмдарҙың ысын тарих менән артыҡ уртаҡлығы ла булмай. Алайыҡ әлеге "Алтын Урҙа"ны. Был кино фантастик булыу өсөн артыҡ тарихи, ә тарихи булыу өсөн артыҡ фантастик. Тарихи осорҙарҙы һәм тарихи геройҙарҙы ниндәйҙер уйлап сығарылған донъяла уйнаталар, ҡыҫҡаһы, шул ғына.

Урҙала Берке хан дәүере бирелә, Тәңрегә табынған халыҡ, барабан һуҡҡан шамандар күрһәтелә. Ысынында ул мәлдә Урҙала тулыһынса мосолман дине хөкөм һөрә. Берке үҙе беренсе булып мосолманлыҡты ҡабул итә. Унан ары Берке хан ҡанһыҙ, аҡылһыҙ һәм тағы ла әллә ниндәй йәмһеҙ юҫыҡтарҙа асыла. Ысынында Берке хан вазифаһында булмай, ул Сыңғыҙхандың өлкән улы Джучинан тыуған ейәне, уға хан титулы бирелмәй, хакимлыҡҡа Монгол империяһы тарҡала башлаған ваҡытҡа тура килә һәм бары Урҙа менән идара итеүсе генә булып ҡала. Ә бына уның урынына килеүсе Менгутимер хан итеп күтәрелә. Сериалда һүрәтләнгән йылдарҙа ла Берке 56 йәшлек бабай түгел, ә 39-40 йәштәрҙәге ир-уҙаманы булырға тейеш. Тарихи мәғлүмәттәр буйынса ла ул позитив тарихи шәхестәрҙең береһе иҫәпләнә. Бик прагматик сәйәсмән була ул. Һарайҙа православие партияһы асырға рөхсәт бирә. Шулай уҡ Урҙаның сәйәси һәм иҡтисади булмышын да ҡотҡарыусыларҙың береһе була был хаким.

Урыҫ дәүләтендәге хәлдәргә күҙ һалайыҡ. Суздалдә хакимлыҡ итеүсене кенәз Борис тип йөрөтәләр. Ундай кенәз тарихта юҡ. Аңлауыбыҙса, 1261-1262 йылдарҙағы ваҡиғалар һүрәтләнһә, Владимир кенәзе ул саҡта Александр Невский булырға тейеш. Ә Ярослав уның ҡустыһы һәм 1263 йылдарҙа ғына тәхеткә ултырған булырға тейеш. Һәр хәлдә, фильм ваҡиғаларында Невский үҙе тере була әле. Тик бында бахыр кенәз телгә лә алынмай.

Сериалдың беренсе серияһында уҡ татар-монголдар килеп, Новгород эргәһендәге ауылдарҙы яндырып китә. Урыҫ кенәзлектәре Джучи олоҫона инә һәм кинола ураған һайын телгә алынған "татар-монгол иҙеүе" лә бында урынһыҙ. Яһаҡ йыйылған - эйе, армия тулыландырылған, әммә улар үҙ олоҫтарын, үҙҙәренең хакимлығында булған ер һәм халыҡты талап-иҙеп-яндырып йөрөмәгән. Был фекер совет осоро тарихсыларының урыҫ тарихын байытыу һәм Урҙа алдында ҡорбан итеп күрһәтеү өсөн уйлап сығарған уйҙырмаларының береһе.

Был оло ваҡиғаларҙан тыш, башҡа ваҡ-төйәктә лә хаталар һәм уйҙырмалар етерлек. Мәҫәлән, бында XIV быуат ваҡиғалары һүрәтләнә, ә урыҫтарҙың өҫтәлендә картуф! Ул ваҡытта Европала ниндәй картуф булһын? Көлөп ҡарарға ғына ҡала. Унан өҫтәл артына килеп ултырған дала ҡыҙы (татарка тип әйтелә) ҡырағай булып ҡылана, ҡалаҡ тота белмәй, алдындағы ҡара ыуылдырыҡты һоҫоп алып ашай башлай, хистәрен бөтөнләй йәшерә белмәй, тыйнаҡлыҡ тигән нәмә менән таныш түгел. Эргәһендәге мәрйәләр барыһы ла яулыҡта, көплө, ә уның яурынбаштары яҡшылап ябылмаған, башы яланғас. Кенәз һынлы кенәз менән үтә лә ҡыйыу, хатта әҙәпһеҙ мөғәмәлә итә, ғаилә тигән төшөнсәне бөтөнләй аңламай, шуның менән мосолман ҡатын-ҡыҙының баһаһын үтә лә төшөрөп ташлай, һәм башҡалар. Етмәһә, ураған һайын уны "ҡырағай татар ҡыҙы", "бысраҡ басурман ҡыҙы", "оятһыҙ" тип кенә торалар. Бөтөн был күренештәр иһә фильм эшләүселәрҙең төрки ҡатын-ҡыҙҙарының әле мосолманлыҡҡа тиклем үк ниндәй тәртиптәрҙә йәшәүен, уларҙың ниндәй мөхиттә үҫеүен, ә инде был осорҙа инде мосолман ҡанундарында булыуҙарын күҙ уңында тотмауы йәки бөтөнләй белмәүе күренеп тора.

Бер йылы Баймаҡ районында "Минең ҡәҙерле кешем" тигән бер сериал өсөн төрки халыҡтар йәйләүен - ҡырғыҙмы, ҡаҙаҡмы халыҡтарының көнитмешен төшөрөп киттеләр. Ысынында, ҡырғыҙ, ҡаҙаҡ яҡтарына барып кино төшөрөү өсөн әллә күпме аҡса талап ителә, ә Рәсәй эсендә осһоҙға ғына эшләнә, күрәһең, бындай эпизодтар. Шунда теләге булған башҡорттар ҙур булмаған суммаға киноға төшөп йөрөнөләр. Ошо мәлде барып ҡарап, хайран булдым. Милләттәштәремде ҡырғыҙмы, ҡаҙаҡмы итеү өсөн ҡап-ҡара итеп буяп бөткәндәр, йәмһеҙ елән-сапандарға урағандар, шундай фәҡир, мәхлүк төҫкә индергәйнеләр. Кинола урыҫ табибы йәйләүгә килеп, был халыҡтың бысраҡлығына, наҙанлығына, ҡырағайлығына хайран булып китә, ҡыҫҡаһы. Эстәлеген яҡшылап белмәйенсә ул киноның сюжетында төшөп йөрөгән беҙҙекеләрҙе әйтәйем дә, төрки донъяһын шулай ҡабул итеүсе "оҫталарын" әйтәйем...

Тарих менән ҡыҙыҡһынған, тарихты белгән кешеләр, әлбиттә, бындай тарихи фильмдарҙы тамаша ҡылғанда барыһын да аңлай, анализлай белә. Әммә күпселек тарихты белмәй һәм киноны ысынбарлыҡ итеп ҡабул итә. Бындайҙарға ниндәйҙер тарихи киноны ҡарағандан һуң йыбанмай ғына ошо хаҡтағы ысын тарихты өйрәнеп алырға кәңәш итер инем. Ундағы мәғлүмәттәр бөтөнләй башҡа йәки башлыса башҡа булып сығасаҡ. Сөнки режиссерҙар, ғәҙәттә, тарихи ваҡиғаның идеяһын һәм тарихи шәхестәрҙең исемдәрен генә ала, ә хәл-ваҡиғалар уның теләге һәм фантазияһы менән үҙгәреп бөтә. Шунлыҡтан, дуҫтар, ҡабатлап әйтәм - кинонан тарих эҙләмәгеҙ. Тарих ул китаптарҙа, тарихсыларҙың хеҙмәттәрендә, эҙләнеүселәр-өйрәнеүселәр биргән инештәрҙә, архивтарҙа һәм бик булмаһа - интернетта. Һәм тарихты белеү бирәүгә лә ҡамасау итмәй - өйрәнегеҙ.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тыңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ЙӨРӘК ҺҮҘЕН ИШЕТТЕРӘЙЕК!

***Наилә СӘФӘРҒОЛОВА, режиссер:*** Бөгөн беҙҙе иң ҙур борсоуға һалған мәсьәлә - ул туған башҡорт телебеҙҙе һаҡлауға, ошо телдә уҡытыуға бәйле. Ошо мәсьәлә тураһында һүҙ сыҡҡан һайын Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, драматург Нәжиб Асанбаевтың васыят итеп әйтеп ҡалдырған һүҙҙәре иҫкә төшә: "Милли мәктәптәрҙе ябыуға юл ҡуймағыҙ", - тигәйне ул. Ул милли театрҙарыбыҙҙың да яҙмышын ҡайғыртып әйтте был һүҙҙәрҙе. Сөнки башҡорт театрының буласаҡ тамашасыһы, башҡорт сәнғәтен һөйөүсе, ҡурай моңон яратыусы, башҡорт әҙәбиәтен уҡыусы, башҡорт донъяһында ҙур асыштар яһаусы шәхестәр нәҡ ошо милли мәктәптәрҙә тәрбиәләнә. Ләкин бөгөн был мәсьәлә барыбер киҫкен тора, халҡыбыҙ вәкилдәре үҙҙәре үк Үҙәктән төшөрөлгән төрлө фарман-закондарҙы туранан-тура ҡабул итергә әҙер тора. Ә бит ул закондарға тиклем беҙҙең бар хоҡуҡтарыбыҙҙы нығытып ҡуйған Төп законыбыҙ - Конституциябыҙ барлығын онотмаҫҡа ине ул.

Тағы ла шуны әйтергә кәрәк, йәш быуын хыялдарҙы бойомға ашырырға, йәшәйеште үҙгәртергә бер кем дә ситтән ярҙам итмәҫен яҡшы аңлай һәм тормошҡа зарланып, ҡул ҡаушырып ултырмай. Олораҡ быуын кешеләренә лә, йәштәребеҙ кеүек, башҡорт халҡының хоҡуҡтарын ҡыҫалар, тип зарланырға түгел, ҡулдан килгәнде эшләргә кәрәк. Халҡыбыҙҙың арҙаҡлы шәхестәре бер ҡасан үҙ һөнәре буйынса ғына белгес булмаған, улар һәр ваҡыт ниндәйҙер кимәлдә сәйәсмән, хоҡуҡ белгесе, һалҡын аҡыл менән проблемаларҙы хәл итә алыр кешеләр булған. Бөгөн милләттәштәрҙең һәр ҡайһыһы шул кимәлдә фекер йөрөтә алырлыҡ ғилемле булырға ынтылһын һәм халҡының ғәмен йөрәгендә йөрөтһөн ине, тигән теләктәмен.

Былтыр үткән "Йөрәк һүҙе" проектында ҡатнашыусыларҙың һәр һүҙе милләттәштәр өсөн йоҡонан уятып ебәргән бер заң булып яңғырағайны. Ниндәй заманалар килһә лә, ниндәй ҡыйынлыҡтар тыуһа ла, башҡорт халҡы йөрәк һүҙен әйтергә, йөрәк һүҙен ишетергә әҙер булһын ине. Йөрәк түрендәге һүҙҙе ваҡытында ҡурҡмайынса әйтә, уны ишетә алабыҙ икән - тимәк, милләтебеҙҙең киләсәге ышаныслы буласаҡ.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Хөкүмәте муниципаль балалар баҡсаларында бала ҡарау һәм тәрбиәләү өсөн түләтелгән ата-әсәләр түләүенең иң күп күләмен билдәләне. Документҡа ярашлы, иң күп түләү күләме Өфөлә билдәләнгән - айына 2 730 һум. Иң аҙы Ағиҙелдә - 1 787 һум. Райондарға килгәндә, иң юғары ата-әсә түләүе Өфө районында - 2 526 һум, шулай уҡ Дәүләкән һәм Иглин райондарында - 2 407 һәм 2 169 һум. Ата-әсә түләүенең иң бәләкәй күләме Йылайыр районында билдәләнгән - айына 1 104 һум.

✓18 марттан водителдәр төнгө ҡараңғылыҡта ҡаланан ситтә туҡтарға мәжбүр булғанда, яҡтылыҡты кире ҡайтарыусы жилет кейергә тейеш, тип хәбәр итә "Известия". Был яңылыҡ кеше ғүмерҙәрен ҡотҡарып ҡалырға ярҙам итер, тип ышаналар ЮХХДИ-да. Сөнки төндә автомобилселәрҙең юл-транспорт фажиғәһенә эләгеү осраҡтары байтаҡ. Баҫмала билдәләнеүенсә, яҡтылыҡты кире ҡайтарыусы элементтар менән кейемдең булыу-булмауы тикшерелмәй, ләкин юл фажиғәһенә осрағанда ул булмаһа, водителдәргә штраф һалыуҙары мөмкин.

✓Йәйге каникулдар мәлендә 10-17 йәштәге балалар поездарҙа 50 процент ташлама менән сәйәхәт итә ала. Билеттар һатыла башлаған да инде. Сара 1 июндән 31 августа ҡәҙәр "халыҡтың транспортта йөрөү уңайлығын арттырыу һәм эске туризмды күтәреү өсөн" индерелә. Бынан тыш, 10-17 йәштәге уҡыусылар өсөн 25 майҙан 1 июнгә тиклем һәм 25 августан 1 сентябргә ҡәҙәр купе вагондарҙа йөрөүгә 50 процент күләмендә ташлама бирелә.

✓Башҡортостанда "Йыл уҡытыусыһы" конкурсының төбәк этабы башлана. Унда бөтөн республика уҡытыусылары ҡатнаша. Ул иһә башланғыс класс, сит телдәр, тарих һәм йәмғиәтте өйрәнеү, рус теле һәм әҙәбиәте, физик культура, химия һәм биология, математика, физика уҡытыусылары.

✓Республикала тәүге орлоҡсолоҡ кооперативы - "Башҡортостандың элита орлоҡтары" ойошторолдо, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Ауыл хужалығы ғилми-тикшеренеү институтында. Республиканың Кушнаренко, Ауырғазы, Мәсетле, Борай, Благовар һәм Шишмә райондары хужалыҡтары орлоҡсолоҡ буйынса ауыл хужалығы ҡулланыусылар кооперативы ағзалары булды.

**“Башинформ”дан.**

✓ *"Президент һайлап ҡайттым. Башҡортса бюллетень һорағанға, тәүҙә күҙҙәрен шаҡмаҡландырып ҡаранылар, оҙаҡ ҡына соҡонғандан һуң, сумаҙан төбөнән килтереп сығарҙылар", "Йылмайып ебәрҙеләр, йүгереп кенә килтерҙеләр"...*



*КӨН ҠАҘАҒЫ*

**18 мартта илдә Рәсәй Президентын һайлауҙар үтте. Өфө ҡалаһы халҡы ла был көндө юғары граждандыҡ әүҙемлеге күрһәтте. Башҡортостан Республикаһы Үҙәк һайлау комиссияһы мәғлүмәттәре буйынса, баш ҡала халҡының 72,41 проценты тауыш биреүҙә ҡатнашты. Был Волга буйы федераль округы ҡалалары һәм илдең миллионлы ҡалалары араһында иң ҙур күрһәткес.**

# ТОТОРОҠЛОЛОҠ ҺАЙЛАНЫҠ




Дөйөм Рәсәй буйынса протоколдарҙың 99,94 процентын эшкәрткәндән һуң, 76,68 процент тауыш йыйып, ғәмәлдәге президент енеү яуланы. Икенсе урында КПРФ-тан кандидат Павел Грудинин (11, 78 процент), өсөнсө урында ЛДПР лидеры Владимир Жириновский (65,65 процент). Артабан тауыштар түбәндәгесә: Ксения Собчак ("Граждандар инициативаһы", 1,68 процент), Григорий Явлинский ("Яблоко", 1,05 процент), Борис Титов (бизнес-омбудсмен, 0,76 процент), Максим Сурайкин ("Рәсәй коммунистары", 0,68 процент), Сергей Бабурин ("Рәсәйҙең дөйөм халыҡ союзы", 0,65 процент).

Сираттағы оператив кәңәшмәлә Ирек Ялалов һайлауҙарға әҙерлек һәм һайлау участкаларының эшен тәьмин итеү буйынса алып барылған эшмәкәрлек менән таныштырғандан һуң, һайлауҙарҙа граждандарҙың әүҙемлеген тәьмин иткән өсөн баш ҡаланың эре предприятиелар етәкселәренә, партиялар ағзаларына, ойошмаларға, ябай граждандарға рәхмәт белдерҙе. Муниципалитет башлығы билдәләүенсә, яңы Рәсәй тарихында был һан - иң юғары күрһәткестәрҙең береһе. Шулай уҡ Ирек Ишмөхәмәт улы һайлауҙарҙың тыныс үтеүен дә билдәләне.

Өфөлә Владимир Путиндың күп тауыш йыйыуын граждандар тарафынан федераль, республика һәм муниципаль властарҙың илдең, төбәктең, ҡаланың социаль-иҡтисади үҫешенә йүнәлтелгән берлектәге эшмәкәрлеген граждандарҙың ыңғай баһалауы тип ҡабул итергә кәрәк. Сөнки һуңғы алты йылда Өфөлә 12 балалар баҡсаһы төҙөлә, 5-әүһе реконструкциялана, 3 яңы мәктәп төҙөлә, 3-әүһе реконструкциялана, 10 дауахана сафҡа индерелә һәм 12 дауалау-профилактика учреждениеһы реконструкциялана. 9 парк, 46 сквер, 5 аллея төҙөкләндерелә һәм яңыртыла. Ҡаланың юл инфраструктураһын үҫтереү буйынса ҙур проекттар тормошҡа ашырыла - Затон күпере һәм Дим юл сиселеше, 2 ер аҫты һәм 5 ер өҫтө үткәүелдәре төҙөлә, шулай уҡ 3 884 671 квадрат метр юл, 336 681 квадрат метр тротуар ремонтлана, төҙөкләндерелә. 2000 йылдан оҙатылған тауар, башҡарылған эштәр һәм күрһәтелгән хеҙмәт - 24, инвестициялар күләме - 7, торлаҡ төҙөү 3 тапҡырға арта. Бынан тыш, Башҡортостандың баш ҡалаһы үҫешенә В. Путиндың 2015 йылда Өфөлә ШОС һәм БРИКС илдәренең халыҡ-ара саммитын үткәреүе лә йоғонто яһай.

"Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһағанда ла Владимир Путин алдағы ун йыллыҡҡа төп бурыстарҙы билдәләп, граждандарҙың аныҡ килемenең үҫешен һәм хәйерселекте бөтөрөүҙе билдәләне. Шулай уҡ ҡалаларҙың мөхитен һәм инфраструктураһын яңыртыу кәрәклеге, уларҙа йәшәү өсөн уңайлы шарттар тыуҙырыу зарурлығы тураһындағы тезистары ла көнүҙәк булды. Владимир Путин Рәсәй кинлеген үҫтереү буйынса киң ҡоласлы программа башларға һәм был маҡсатта сығымдарҙы алдағы алты йылда ике тапҡыр арттырырға тәҡдим итә. Тимәк, ҡалалар һәм ҡасабалар төҙөкләндереү, инфраструктураларын үҫтереү мөмкинлеге аласаҡ", - ти Ирек Ишмөхәмәт улы.

Был көндө Өфөлә ҡала мөхите объекттары буйынса референдум да үтте. Унда 450 630 кеше, ҡала халҡының дөйөм һанының 54 проценты, тауыш бирҙе. Уға муниципалитетта 21 мартта, рейтинг тауыш биреүен ойоштороу мәсьәләләре буйынса йәмәғәт комиссияһының йомғаҡлау ултырышында йомғаҡ яһалды.

Территория комиссиялары белдереүенсә, тауыш биреү Өфө халҡында ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырған, дизайн-проекттар буйынса әүҙем фекер алышҡан һәм тауыш биреү барышында төҙөкләндереү талап ителгән башҡа территорияларҙы ла тәҡдим иткән.

Һайлау тамамланғандан һуң территориаль иҫәп комиссиялары йомғаҡ яһап, протоколдарҙы ҡала иҫәп комиссияһына тапшырған. Улар үҙ сиратында 292 протоколды ла тикшереп, дөйөм йомғаҡ яһаған. Һөҙөмтәлә, тауыштар түбәндәгесә билдәләнгән:

1. "Ҡашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял паркы - 103 194 тауыш
2. "Түлҡын" скверы - 86 907 тауыш
3. Иван Якутов исемендәге парк - 86 344 тауыш
4. Максим Рыльский урамы - 84 432 тауыш
5. Ҡариҙел йылғаһы яры - 82 571 тауыш
6. "Нефтехимик" мәҙәниәт һәм ял паркы - 81 337 тауыш
7. "Беренсе Май" паркы - 78 979 тауыш
8. Непейцев дендропаркы - 57 486 тауыш
9. "Дим" мәҙәниәт һәм ял паркы - 34 029 голосов
10. "Таш йылға" - 33 091 тауыш

Шулай итеп, өфөләр үҙҙәре һайлауынса, тәү сиратта быйыл федераль средстволар иҫәбенә "Кашҡаҙан" паркы һәм "Тулҡын" скверы төҙөкләндереләсәк. Исемлектәге башҡа йәмәғәт урындарында, графикка ярашлы, 2018 - 2022 йылдарҙа эшмәкәрлек алып барыласаҡ.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*



Билдәле булыуынса, һайлау бюллетендәре республиканың дәүләт телдәрендә - рус һәм башҡорт, шулай уҡ татарҙарҙың компактлы йәшәгән урындарында таратыу өсөн татар телендә лә баҫылды. Республиканың байтаҡ районданында, хатта башҡорттар күпләп йәшәгән ауылдарҙың ҡайһы берҙәрендә башҡортса бюллетендәрҙе көндөҙ шәм яндырып эҙләһәң дә табылмаһа, Өфө ҡалаһында тауыш биргән милләттәштәребеҙ белдереүенсә, был йәһәттән проблема булмаған. "Президент һайлап ҡайттым. Башҡортса бюллетень һорағанға, тәүҙә күҙҙәрен шаҡмаҡландырып ҡаранылар, оҙаҡ ҡына соҡонғандан һуң, сумаҙан төбөнән килтереп сығарҙылар", "Русса бюллетень биргәйнеләр, аҙаҡ башҡортсаһын эҙләп табып бирҙеләр", "Минә шунда уҡ бирҙеләр. Йылмайып ебәрҙеләр, йүгереп кенә килтерҙеләр", "2-3 минут көтөп ултырҙым башҡортса бюллетень килтергәндәрен. Ултырғыс тәҡдим иттеләр. Килтерҙеләр. Ғәфү үтенделәр. Һайланым", "Һорап алдым, ҡайҙандыр төптән һөйрәп сығарҙылар", "Мин бюллетенде һорау менән сығарып бирҙеләр. Татар теленән дә сығарҙылар. Береһе, кемдеке Сайлау... кемдеке Һайлау... тип һорай. Һайлау - башҡорттоҡо тинем". "Өфөлә һайланым, Совет районында. Байтаҡ ҡына ваҡыт көттөргәндән һуң булһа ла, башҡортса бюллетень сығарып бирҙеләр, рәхмәт төшкөрҙәре!", "Минә башҡортса бюллетенды сейфтан сығарып бирҙеләр. "Руссаһы бармаймы?" - тип һоранылар" - бына шундай юҫыҡтағы тәьҫораттары менән бүлешә баш ҡала халҡы социаль селтәрҙәрҙә.

Быйылғы уҡыу йылы башындағы туған һәм дәүләт телдәрен уҡытыуға ҡағылышлы килеп тыуған шау-шыу йоғонтоһонда милләттәштәребеҙҙең үҙаңы уяныуы һөҙөмтәһеме, әллә участка, территориаль һайлау комиссиялары ағзаларының намыҫлы эшләүеме, әммә үткән һайлауҙарҙа баш ҡалала башҡортса бюллетень һораусылар барыһы ла үҙ телендә граждандыҡ бурысын үтәне. Был йәһәттән баш ҡала ысын мәғәнәһендә республикаға исем биргән халыҡтың телен һанлау һәм башҡаларға телебеҙҙең ҡулланыу даирәһен киңәйтеү буйынса өлгө булып тора, тиергә мөмкин. Ысынлап та, ыңғай күренештәр баш ҡаланан башланырға тейештәр ул.

**Вәсилә ӘХӘТОВА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Урман янғындары хаҡында ялған мәғлүмәт өсөн штраф түләргә тура киләсәк - март айынан Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы Рәсәй Федерацияһы кодексына яңы статья инделде. Мәғлүмәт бирмәгән йәки ялған мәғлүмәт биргән өсөн штраф - өс-биш мең һум, урман янғындары тураһында 10-15 мең тәшкил итәсәк.

✓"Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбле абруйлы ҡунаҡ сифатында "Михаил Мурашко дуҫтарын саҡыра" халыҡ-ара конкурс-фестивалендә ҡатнаша. Ул 29-31 мартта Мари Иле Республикаһында - Йошкар-Ола ҡалаһында үтә. Өфө ансамбле шулай уҡ фестиваль сиктәрендә ике соло концерт бирә.

✓Башҡортостандың Сауҙа буйынса дәүләт комитеты интернетта әйбер һатып алғандар һәм мутлашыусылар тоҙағына эләгергә теләмәгәндәр өсөн "ҡыҙыу элемтә" асылыуы хаҡында иғлан итте. Бушлай "ҡыҙыу элемтә" эш көндәрендә 30 мартҡа тиклем эшләй. Өфөләге телефон: (347) 218-09-78.

✓2018 йылда Башҡортостанда 2000 ҡатын-ҡыҙ бушлай ЭКО яһата ала. Былтыр республикала 6 мең самаһы экстракорпораль аталандырыу процедураһы эшләнгән, уларҙың 1500 самаһы мотлаҡ медицина страховкаһы иҫәбенә, йәғни бушлай. Был 2016 йылға ҡарағанда ике тапҡырға тиерлек күберәк, тип хәбәр итте Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры Әнүәр Бакиров.

✓UniRank халыҡ-ара рейтинг буйынса, Башҡорт дәүләт университеты Рәсәйҙең 100 иң яҡшы юғары уҡыу йорто исемлегенә ингән. Рейтинг донъялағы 200 илдең юғары уҡыу йорттарының танылыу кимәлен анализлаған. Илдең иң популяр вуздары исемлегендә Башҡорт дәүләт университеты 74-се урынды биләй. Рейтингтың беренсе баҫҡысында - Мәскәү дәүләт университеты. Шулай уҡ тәүге өс лидер иҫәбенә Юғары иҡтисад мәктәбе һәм Санкт-Петербург дәүләт университеты инә.

✓Фәйзи Ғәскәров исемендәге VIII төбәк-ара халыҡ бейеүҙәре ансамблдәре фестивале иң яҡшы бейеү коллективтарын йыя. Ҡатнашыу өсөн үҙешмәкәр халыҡ бейеүҙәре ансамблдәре саҡырыла. Фестиваль 18-20 апрелдә Мәләүездә уҙа. Ғаризалар 13 апрелгә тиклем gukrcnt@mail.ru электрон адресына ҡабул ителә. Белешмәләр өсөн телефон: (347)-289-62-00.

✓ "Шаяниум -2018" тамашасыларға көлкө һүҙ артына йәшерелгән тәртмә фекерҙәре менән иҫтә ҡалды. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов та еңеүселәрҙе тәбрикләгән саҡта был турала телгә алды.



АФАРИН!

# ЕҢЕҮ ЯУЛАУ ӨСӨН...

## көс һалырға кәрәк шул













**(Башы 1-се биттә).**

Ике тиҫтә йылға яҡын ваҡыт эсендә гәҙәтебеҙгә ингән, әммә гәҙәти булмаған был "Шаяниум" шаяндар һәм тапҡырҙар конкурсында ҡатнашҡан балалар сараны "Сәләмләү"ҙән башланы. Беренсе булып сығыш яһаусы З. Биишева исемендәге 140-сы Башҡорт гимназияһы уҡыусыларының: "Һеҙҙең алдығыҙҙа "Ығы-зығы" һәм беҙ бөгөн Путин һымаҡ - еңәбеҙ!" - тип сәмләнеүен ишеткәс тә, ярыштың көсөргәнешле буласағы һиҙелде. Шаяндарға, үҙҙәре әйтмешләй, ил башлығы кеүек еңеүгә килеү өсөн ҙур көс һалырға тура килде.

Тормошобоҙҙа тәрлө өлкәлә әленәнәле яңырып торған борсолоуҙар "Шаяниум"да яңғыраған төп темаларҙың береһе, тиергә була. Мәҫәлән, М. Искужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейының "Һупайлы дәрүиштәре" командаһы был юлы мәктәптәге уҡыу-тәрбиә мәсьәләләрен күтәреп сыҡты. Тапҡыр һүҙле уҡыусылар: "Ошо урында бейеү булырға тейеш ине. Беҙҙең бейеү башҡорт теле кеүек", - тип күптәрҙе уйға һалып та ҡуйҙы. Йәш буйынса иң кесе, әммә шаянлыҡта өлкән ағай-апайҙарынан һис тә генә лә ҡалышмаған 48-се Башҡорт лицейының "Сәтәкәй" КВН командаһы конкурстың "Биатлон" тип аталған турында "Башҡорттар.ru" командаһы менән ярышып, жюри ағзаларын иң юғары балдарҙы уртаға бүлеп тауыш бирергә мәжбүр итте. Әйткәндәй, "Биатлон" туры барышында Республика инженер лицей-интернатының "Башҡорттар.ru" командаһы "йырлап" сығыш яһаны: мәрәкәне билдәле көйҙәргә һалып яңғыратты. Тамашасы һөйөүен яулаған был команданың "Ысын мосолмандар колбасаны ла ҡиблаға һалып ҡырҡа", - тигән мәҙәк һүҙе хәтерҙә ҡалды. Ф. Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһының "XX централ" командаһы ярыштың "Стэм" тип аталған өсөнсө өлөшөндә М. Кәримдең "Ай тотолған төндә" трагедияһы буйынса "төшөрөлгән" Бразилия сериалын күрһәтте. Мөҙенсе сериянан һуң "шуттан яҙған" режиссерҙар оолорҙы бала һүҙенә ҡолаҡ һалырға өйрәтте. Былтыр Гран-при яулаған 102-се Башҡорт гимназияһының "Етегән+1" КВН командаһы Дим биҫтәһе мэры Димов Дим Димычтың видеомөрәжәғәтен алып килгән. Мэр кеше аптырап торамы: "Дим йөрәктә, фатир үҙәктә", - тип фәстереп ебәрҙе, ә шаяндар Дим биҫтәһендә хатта кинотеатр булмауын иҫкә төшөрҙө. Республика инженер лицей-интернатының "Башҡорттар.ru" һәм "Һупайлы дәрүиштәре" командалары тиҫтерҙәренә китап уҡымау, наҙанлыҡ нимәгә килтереүен сәхнәләштерҙе. "Ығы-зығы" уйынсылары Өфөлә Ағиҙел йылғаһы аша һалынасаҡ күпер "бара-бара" тип кенә эшләнеп, Санкт-Петербург күперҙәре кеүек булмаһын, тигән шик белдереп ҡуйҙы. Ғөмүмән, "Шаяниум -2018" тамашасыларға көлкө һүҙ артына йәшерелгән тәртмә фекерҙәре менән иҫтә ҡалды. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов та еңеүселәрҙе тәбриклә гән саҡта был турала телгә алды:

- Өс сәғәт барышында һеҙҙең сығыштарҙы ҡарап, һеҙҙең өсөн шатланып ултырҙыҡ. Беҙҙең көндәлек тормоштағы етешһеҙлектәрҙе күреп, тапҡыр шаяртыуҙарығыҙ аша беҙгә артабан яҡшыраҡ эшләү өсөн этәргес көс бирҙегеҙ. Һеҙҙең сығыштарҙы ҡарап, урынлы шаяртыуҙарығыҙҙы ишетеп, үҙебеҙҙә ҙур фәһем алдыҡ. Һәр ваҡыт үҙегеҙ шундай тапҡыр, телегеҙ шундай матур булһын! - тине Сынтимер Биктимер улы, уҡыусыларға өндәшеп.

Ысынлап та, быйыл "Шаяниум" шаяндар һәм отҡорҙар ҡала конкурсы юмор һәм сатира был тормошта нимә өсөн кәрәк булыуын күрһәтте. Мәрәкәсел кеше мәғәнәһеҙ һүҙ һөйләп, ауыҙ йырып йөрөүсе түгел, ә дәүләт кимәлендәге көнүҙәк темаларға халыҡ фекерен тапҡыр итеп әйтә торған кеше. Ошо хәҡиҡәткә төшөнгән һәм башҡаларға ла шул турала әйтә алған балаларға һоҡланмай булмай, әлбиттә. Сөнки улар кескәй йөрәгендә бөгөндән үк туған теле, тыуған ҡалаһы, иле һәм халҡы тураһында оло ғәм йөрөтә. Конкурс тамамланғас, 48-се Башҡорт лицейының "Сетәкәй" командаһының берҙән-бер ир-егете Рөстәм Рәфғәтдинов менән әңгәмәләштек. "Минә "Шаяниум" бик оҡшаны, бында күп дуҫтар таптым, бөтәһе менән дә һөйләштем, беҙ бер ҙур ғаилә ул хәҙер, - тине ул. - Беҙ бер команда, ә командала бер-береһен йәберләтмәйҙәр, беҙ татыу. "Шаяниум"да бөтәһе лә ҡатнашһын, иң мөһиме, еңеү өсөн тырышырға кәрәк. Беҙгә өлкәндәр ҙә "Шаян булығыҙ, еңегеҙ!" тине. "Башҡорттар.ru" командаһы ныҡ оҡшаны, беҙ улар ҙан саҡ ҡына ҡалыштыҡ". Дүртенсе сыныфта белем алған Рөстәмде жюри "Иң яҡшы ир-егет роле" номинацияһында билдәләне. Ә бына конкурстың "Иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле"н башҡарыусы тип "XX централ" командаһынан Азалия Ишкинина танылды.

Бүләктәр ҙә балаларҙың күңелен үҫтерә икәнен беләбеҙ. "Башҡорттар.ru" командаһына Динар Шаһиев "Оптик-мастер" магазиндары селтәренән махсус бүләк тапшырҙы. Шулай уҡ, балаларҙың күңелен күреп, "Ҡурай" телевизион каналы директоры Рита Өмөтбаева "Креатив номер" номинацияһында "Сәтәкәй" һәм "XX централ" командаларына махсус бүләктәрен бирҙе. "Иң берҙәм команда" номинацияһында З. Биишева исемендәге 140-се Башҡорт гимназияһының "Ығызығы" командаһы, "Тамашасы һөйөүе" номинацияһында 5-се Спорт профилле республика мәктәп-интернатының "InterСпорт" командаһы бүләкләнде.

"Шаяниум" шаяндар һәм отҡорҙар ҡала конкурсына йомғаҡ яһағанда уҡытыу урыҫ телендә алып барылған белем усаҡтарынан ҡатнашҡан командалар араһында еңеүселәр айырым билдәләнде. Быйыл улар араһында III урынды 113-сө лицейҙың "Искәндәр бабай" һәм 49-сы мәктәптең "Сәйнүктәр" командаһы алды, II урынды 25-се белем биреү үҙәгенең "Беҙ 25-тәр" командаһы, I урынды 44-се мәктәптең "Ҡырғаяҡтар" командалары яуланы.

"Шаяниум" шаяндар һәм отҡорҙар конкурсының төп финалистары араһында еңеүселәр былай билдәләнде: III урын - 102-се Башҡорт гимназияһының "Етегән+1" командаһы һәм М. Искужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейының "Һупайлы дәрүиштәре" командаһы; II урын - Ф. Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһының "XX централ" командаһы; I урын - 48-се башҡорт лицейының "Сәтәкәй" командаһы. "Шаяниум" шаяндар һәм отҡорҙан ҡала конкурсының финал уйыны Гран-приһын Республика инженер лицей-интернатының "Башҡорттар.ru" командаһы яуланы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Шаяниум-2018" конкурсының "Ояһында ни күрә, осҡанында шул булыр" тигән темаға арналыуы ла юҡҡа түгел. Оябыҙ - ғаилә генә түгел, баш ҡала, республика, Рәсәй ул, һәм тормошобоҙҙағы бөтә хәл-ваҡиғалар баланың йәшәү рәүешенә, донъяға ҡарашы формалашыуға тәьҫир итә. Тәү ҡармаҡҡа бер ҡатлы тойолған, әммә уйлаһаң - уй, ғәмләгә - ғәм, аҡыллыға - фәһем булырлыҡ көләмәстәр һөйләгән балаларҙың һүҙенә ваҡытында ҡолаҡ һала белергә лә кәрәк. Ә бит тормош хәҡиҡәте күберәк балалар теленә һалына икәнен онотмайыҡ.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ирендәр ярылғанда...

❖ Ирендәргә бал һөртөргә һәм 15-20 минуттан һуң йыуып, крем һыларға;

❖ Ҡыяр һыуы менән йомшартырға ла була. Көнөнә бер-нисә мәртәбә эшләргә кәрәк;

❖ Һалҡын, елле көндәрҙә урамға сығыр алдынан ирендәргә майлы крем һөртөргә лә өҫтөнән пудра яғырға, һуңынан ғына помада ҡулланырға;

❖ 1 балғалаҡ эремсекә 1 балғалаҡ кишер һуты ҡушып яһалған ҡатнашманы һөртөргә;

❖ 1 балғалаҡ вазелинға балғалаҡтың 4/3 өлөшө күләмендә кастор майы ҡушып та һөртөргә була;

❖ 6-7 грамм какао, 2-3 грамм балауыҙ һәм 10 грамм үҫемлек майынан яһалған майҙы һөртөргә була.

### Йәрәхәтте дауалау

❖ Тәндең бәрелгән һәм тәҙәлмәҫ йәрәхәттәренә яңы һуйылған һарыҡ тиреһен ябыу бик файҙалы.

### Йөҡөнһоҙлоҡ

❖ Кагорға (0,5 мл) 50 гр укроп орлоғон һалып, һүрән утта 2-3 минут ҡайнатып алаһың. Йоҡлар алдынан 50-60 мл эсәһең.

### Бөйөрҙәге таш

❖ Бөйөрҙә таш булһа, йәбешеүсәнлеге бөтөү менән иртә яҙҙа ҡайын япрағын йыйып киптерегеҙ. Япраҡтарҙы сепрәк тоҡсайҙа һаҡлағыҙ. Дауаланыу өсөн бер балғалаҡ киптән япраҡты бер стакан ҡайнап торған һыуға һалып, 20-30 минут төнәтегеҙ, һөҙөгөҙ. Бер балғалаҡ балды ҡаба-ҡаба төнәтмәне сәй кеүек эсегеҙ. Балға бер әстерхан сәтләүеге тешен дә ҡушырға була, тик бер айҙан һуң балды кире сәтләүекһеҙ ашағыҙ. Төнәтмәне көнөнә 3-4 мәртәбә аc ҡарынға эсергә. Дауаланыу осоронда, ғөмүмән, бөйөргә таш ултырған ваҡытта итле аш, итле ризыҡ, һөт ризыҡтары ҡулланмаҫҡа.

### Панкреатит

❖ Ярты литр ваҡланған гөлйемеш, 1-әр стакан укроп орлоғо, аҡ сәскә, дегәнәк тамырын ҡушып болғатырға. 2-3 ҡалаҡ ошо ҡатнашмаға ярты литр ҡайнар һыу өҫтәп, термоста 2-3 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашағандан 1 сәғәттән һуң яртышар стакан эсергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Ишандың даны таралыуға уның шәхси сифаттары ла булышлыҡ итә, сөнки ул оратор оҫталығы менән генә айырылмай, ә хәтере шәп булғанлыҡтан, Ҡөрьән Кәримдең ҙур-ҙур өлөштәрен яттан һөйләй.*



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## "Сигенеү - ҡасыу тигәнде аңлатмай..."

630 йылдың 1 ғинуарында ун меңлек мосолман ғәскәре Мәккәгә юллана. Әбү Суфиян тағы бер тапҡыр Мөхәммәт бәйғәмбәр янына килә. Был юлы Мөхәммәт бәйғәмбәр уны ҡабул итә. Әбү Суфиян үҙенең еңелеүен таный һәм Ислам динен ҡабул итә. Мөхәммәт бәйғәмбәр Мәккә халҡына, ҡаршылыҡ күрһәтмәһәләр, теймәҫкә вәғәҙә бирә. Мосолман диненең иң яуыз дошмандарын ғына хөкөм итәсәкмен, ти ул. Әбү Суфиян, Мәккәгә ҡайтып, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең һүҙҙәрен халыҡҡа еткерә. Ислам диненең иң яуыз дошмандарын, шулай уҡ яуҙарҙа ирҙәрен, улдарын юғалтҡан ҡатын-ҡыҙҙарҙы ҡорал тотоп, һуғышырға өндәй. Тик күпселек уларҙы тыңламай. Ҡөрәйштәр яуһыҙ бирелергә була.

### Вәхши мосолман динен ҡабул итә

11 ғинуар мосолмандар ҡалаға инә. Мөхәммәт бәйғәмбәр Мәккәлә ҡан ҡойош булмаһын өсөн барыһын да эшләй. Мәҫәлән, ярҙамға ситтән килгән ырыуҙарҙы айырып ҡуя ла, уларға етәксе итеп Хәлит ибн Вәлитте билдәләй. Сөнки һуғышырға ашҡынып торған был яугирҙарҙы фәҡәт ул ғына тыйып ҡала алырына ышана ул. Шулай була ла. Ансарҙар менән мөһәжирҙәргә баш итеп тәүҙә Сәәдте билдәләй. Ләкин Сәәд, хәрби байраҡты ҡулына алыу менән:

- Бөгөн - һуғыш көнө, бөгөн Ҡәғбәне яулап аласаҡбыҙ! - тип ҡысҡыра, шатланып. Мөхәммәт бәйғәмбәр шунда уҡ байраҡты ала ла, Ғәлигә тоттора.

Мәккәлә, ысынлап та, ҡан ҡойош булмай тиерлек. Бер-ике урында ғына Хәлит ибн Вәлит яугирҙарына ҡөрәйштәр һөжүм итә. Һөжүм итеүселәр үлтерелә, ҡайһы берәүҙәре ҡасып өлгөрә, Хәлит ибн Вәлит ошо хәл менән файҙаланып, Мәккә халҡын ҡыра башларға әҙер булған ғәскәрен тотоп ҡала ала.

Ҡөрәйш халҡы Мөхәммәт бәйғәмбәр янына килеп, мосолман динен ҡабул итә башлай. Ҡасандыр Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе кәмһеткән, уға бысраҡ ташлаған кешеләр, ғәфү ителеүҙәрен белгәс, бик ҡыуана. Мәккә халҡының күбеһе Ислам динен ҡабул иткәндән һуң, Мөхәммәт бәйғәмбәр Ҡәғбәне ялған илаһтарҙан таҙартырға ҡуша. Быға бер кем дә ҡаршы һүҙ әйтмәй. Тиҙ арала Ҡәғбәләге илаһтарҙың һындары юҡ ителә.

Мәккә халҡын бер кем дә көсләп мосолманлаштырмай. Ислам динен ҡабул итергә теләмәүселәр мәжүси булып ҡала бирә. Уларға береһе лә ҡаты бәрелмәй, ашыҡтырмай ҙа. Тик ундайҙар күп булмай.

Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең иң яуыз дошмандары байтаҡ ваҡыт төрлө урындарҙа йәшенеп ята. Ҡатындары менән туғандары иң абруйлы мөһәжирҙәр аша уларҙы ярлыҡау хәстәрлеге күрә. Мөхәммәт бәйғәмбәр күбеһен ғәфү итә.

Ләкин язалар ҙа була. Мәҫәлән, ҡасандыр мосолман булып, Мәҙинәнән Мәккәгә ҡасып ҡайтып, Ислам тәғлимәте тураһында мыҫҡыллы һүҙҙәр һөйләүсе ике ҡөрәйш язаға тарттырыла. Шулай уҡ, ҡасандыр Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең ҡыҙҙарын туҡмаған Хәббәр һәм тағы бер ҡөрәйш ире язаға тарттырыла.

Үлтерелгән ырыуҙаштары өсөн ҡарымта хоҡуҡтарын талап иткән хузаа ырыуы кешеләрен Мөхәммәт бәйғәмбәр ҡан ҡойоуҙан тыя. Үҙ аҡсаһынан ҡан хаҡын түләй. Хузаалар был ҡарарға буйһонорға мәжбүр була.

**(Дауамы бар).**

*АРҘАҠЛЫ ШӘХЕСТӘРЕБЕҘ*

# ЗӘЙНУЛЛА ИШАН -

## башҡорт халҡының рухи батшаһы

**Һүҙҙе юғарыла Хәбибулла Рәсүлевта туҡтатҡайныҡ. Шуны дауам иттерәйек. Хәбибулланың ике балаһы була. Береһе - Фәтхулла, икенсеһе - Зәйнулла.**



Фәтхулланың балалары:

1. Ғайса - ул рус-япон һуғышында полк муллаһы булып хеҙмәт итә, ҡайтҡас, Әүеш ауылында йәшәп, Туңғатар улысында ахун булып тора.

2. Муса - Ғайса кеүек үк, Троицкиҙа Зәйнулла хәҙрәт янында уҡып сыҡҡас, хәҙерге Учалы районының Ахун мәхәлләһендә имам булып хеҙмәт итә.

Зәйнулла хәҙрәттең беҙ асыҡлай алған балалары барлығы - 11. Улдары: Ғабдрахман оҙаҡ йылдар Өфө диниә назаратының мөфтөйө булып тора; Һибәтулла бәләкәй сағында үлеп ҡала; Ғабдулла - "Рәсүлиә" мәҙрәсәһендә белем ала, уҡыуын Стамбулда дауам итә, туған башҡорт теленән тыш, рус, төрөк, ғәрәп, ҡаҙаҡ телдәрен белә, I Бөтә донъя һуғышында тәржемәсе булып хеҙмәт итә; Ғәбделҡадир "Рәсүлиә" мәҙрәсәһендә һәм Төркиәлә белем алғас, мәҙрәсә типографияһында эшләй, аҙаҡтан Әстерханда имам булып тора, Ғәбделсабур мәҙрәсә китапханаһында, аҙаҡ Ҡаҙанда уҡытыусы булып эшләй. Барыһы ла юғары белем ала. Зәйнулла ишанға кескәй улы Ғәбделсабуры тыуғанда 66 йәш була. Ҡыҙҙары: Нәфисә (ире - имам Мөхәмәҙи), Кәримә (имам Йософ Ихсанов), Сәлихә (хажи Мөхәммәт Яҡшымбәтов), Рабиға (Әхтәм мулла), Ҡурателғаян (Ғәбделкәрим хәлфә), Ғәйшә (мәҙрәсә хәлфәһе Ибраһим Юманҡулов) исемлеләр. Шуныһы иғтибарға лайыҡлы: ҡыҙҙарының барыһы ла, имамдарға һәм хәлфәләргә сығып, тормош ҡора. Зәйнулла хәҙрәттең ейән-ейәнсәрҙәренең һаны 30-ға етә.

Хәҙер инде Зәйнулла ишандың бала сағына кире ҡайтып, уның тыуған ауылы Шәриптә, өйҙәренең эргәһендә генә булған мәҙрәсәлә уҡыуын, ун ике йәшенән Шәриптән алыҫ түгел Малай Муйнаҡ ауылына барып уҡырға инеүен әйтеп үтәйек тә, бына ошондағы мәҙрәсәлә йәш шәкерткә артабан ҙур йоғонто яһаясаҡ Яҡуп хәҙрәткә айырым иғтибар бирәйек. Элекке зауряд-сотник Яҡуп Зәйнәғәбетдин улы Зәйникәев, тормош ауырлыҡтарын күп татыған һәм Троицкиҙа уҡып килгән ҙур мәғлүмәтле имам, 1848 йылда Ахун ауылының икенсе мәхәлләһенә имам-мөҙәрис итеп күсерелгәс, шәкерте Зәйнулланың һәләтен күреп, уны үҙе менән бергә алып китә. Зәйнулла бында уҡыуын тамамлағас, Яҡуп хәҙрәттән Троицкиға ебәреүен ҡат-ҡат һораһа ла, уның фатихаһын ала алмай. Имам Зәйнулланы йөҙҙән ашыу шәкерте булған мәҙрәсәгә хәлфә итеп алып ҡалырға теләй.

Ахырҙа, Зәйнулла, яратҡан хәлфәһен ҡалдырып, өйәҙ үҙәгенә ҡасып китә һәм данлыҡлы Яуышевтар мәхәлләһе эргәһендәге Әхмәт бән Хәмит әл-Миңгәрәй мәҙрәсәһенә уҡырға инә. 1851 йылда була был. Ахундағы Яҡуп хәҙрәт тә тиккә генә ымһынмаған икән - Зәйнулла бында ла фәндәрҙе тиҙ үҙләштереүе менән айырылып тора, мәҙрәсәлә бер нисә шәкерткә хәлфәлек тә итә башлай.

Йөрәге һәр саҡ ҡайҙалыр ашҡынып торған, күберәк яңылыҡ белергә тырышҡан егетте Троицкиҙағы тормош та ҡәнәғәтләндермәй башлай. Берҙән-бер көндө ул, каруанға эйәреп, алыҫ Бохараға юл тота. Бик ҡаты һыуыҡ булыу сәбәпле, инде үлдем, тигән урындан, кире боролорға тура килә. Троицкиға 90 саҡрым ҡалғас, бер мосолман ауылы янында, билеты булмағанлыҡтан, полиция ҡулына эләгә. Ярай әле, Сафа тигән шәкерт иптәше тап булып, уның атаһының һорауы буйынса Зәйнулла ҡотола, Троицкиға әйләнеп ҡайта. Был мажараның төп сәбәбе, әлбиттә, ғилемде арттырырға ынтылыуҙа була.

Зәйнулла, ниһайәт, 1858 йылда имтихан тотоп, имам хатип һәм мәҙрәсәнең мөҙәрисе сифатында Типтәр-Учалы волосының Аҡҡужа ауылына китә. Бәлки, шунда ғына ул ни өсөн донъяға килеүен, донъяуи хәстәрлектәрҙән баш тартып, Аллаһы Тәғәләгә хеҙмәт итеү юлынан китергә тейешлеген аңлайҙыр. Ул күп уҡый, тирә-яҡ руханиҙары менән бәйләнештәр булдыра, арҙаҡлы Ғәбделхәким мөрит тәрбиәһенән дәрестәр ала. Әмәлгә - дарыу тигәндәй, уға тиҙҙән ҙур мөмкинлектәр асыла. Ҡаҙаҡтарҙың Жәббәс ырыуынан Ершыбай исемле бер бай вафат булып, уның өсөн хаж ҡылыуҙы Зәйнулла хәҙрәттән үтенәләр. Бәдәл хаж өсөн ҡулына мең һум аҡса төшкәс, ул 1869 йылдың 18 августында Истамбулға китә. Унда Әлшәйех Әхмәт Зиялетдин бән Мостафа Көмөшхәнәүи хәҙрәтенән дәрес ала. Шәйех Көмөшхәнәүи уға селләханаға кереп, ураҙа тоторға, унда һәр көн йөҙ мең тапҡыр зекер әйтергә бойора. Зәйнулла ҡырҡ көн буйына бикләнеп ултырып ураҙа тота, зекер әйтә, ҡыҫҡаһы, шәйехтең бойороғон тулыһынса үтәй. Ваҡытында Вау диуана юҡҡа ныҡышмаған икән. Белорет районының Шығай ауылынан Сәүҙә Ихсанованың раҫлауынса, Вау Зәйнуллаға сабый сағында сәңгелдәктә ятҡанда уҡ әйткән, имеш: "Йоҡлап ятма, күп итеп зекер әйт, хәтерең яҡшы булыр", - һәм бойороғон баланы сыбыҡ менән һуғып нығытып ҡуйған.

Күп зекер әйткән Зәйнулла, зиһенен дә үткерләгән шулай итеп. Ҙур һынауҙар аша үткәндән һуң, ул Хижазға китә. Мәҙинә Әлрәсүл Ғәлиә Исламға рамаҙан шәрифтең өсөнсө көнөндә барып етә. Зөлҡәғиҙәнең егерменендә Зәйнулла Мәҙинәнән дөйәлә Мәккәгә китә һәм зөлхизәнең икенсе көнөндә унда була. Хажды башҡарып, пароход менән Истамбулға ҡайта. Унда Көмөшхәнәүи уға Нәҡшбәндиә тәриҡәтендә мөриттәр булдырырға фарман бирә, шул йүнәлештә дәрес биреү өсөн ижазәтнамә (диплом) менән тәьмин итә.

Зәйнулла хәҙрәт иленә 1870 йылдың июнь башында ҡайта һәм сентябрь айҙарында үҙенең бурысын үтәргә тотона. Тиҙ арала ярандар һәм эйәреүселәр пәйҙә була. Абруй арта, хатта башҡа шәйехтәрҙең мөриттәре лә Зәйнулла хәҙрәткә күсә башлай. Был хәлде Зәйнулла хәҙрәттең ғалимлығы һәм кешелеклелеге менән генә аңлатырға мөмкин. Бәләкәй генә Аҡҡужа ауылы мәсете килгән бөтөн кешене һыйҙыра алмағанлыҡтан, Зәйнулла имам вәғәздәрен урамға, тау буйына сығып әйтергә мәжбүр була. Меңәрләгән мосолман йыйылған Мәүлет байрамдарын да сәхрәләрҙә үткәрә. Зыяраттарҙы изге урын тип иғлан итә, ҡысҡырып зекер әйтеүҙе индерә, китапханалар ойоштора. Күренеүенсә, яңы хажи ҡолас йәйеп эшләй: халыҡҡа ныҒыраҡ тәьҫир итерлек алымдар ҡуллана.

Әлбиттә, ишандың даны таралыуға уның шәхси сифаттары ла булышлыҡ итә, сөнки ул оратор оҫталығы менән генә айырылмай, ә хәтере шәп булғанлыҡтан, Ҡөрьән Кәримдең ҙур-ҙур өлөштәрен яттан һөйләй. Шулай итеп, ул үҙенең киң мәғлүмәтле булыуын, мосолмандарға йомшаҡ мөғәмәлә итеүен күрһәтеп, тиҙ арала халыҡ мөхәббәтен яулай. Үкенескә ҡаршы, тормошта бер нәмә ҡабатланыусан: яңылыҡ бер ҡасан да ҡаршылыҡһыҙ булмай. Ишандың абруйы үҫкән һайын, күрә алмаусылар ҙа күбәйә. Мөриттәрҙең, беҙҙең Зәйнулла хәҙрәт үҙенең остаҙы Хәким мулланан да көслөрәк булып сыҡты, тип һөйләп йөрөүенән, быны ҡайһы бер әҙәмдәрҙең элеп алыуынан Зәйнулланың тағы бер дошманы өҫтәлә.

Аһ, был көнсөллөк тигән нәмә! Күпме аҫыл ирҙәрҙең башына еткән ул. Бына ошо хөсөтлөк ҙур абруй ҡаҙанып өлгөргән Зәйнулла хажи юлына ла кәртә ҡуя. Хажиҙың яҙмышында ҡоһоро ҡайнаған тағы

✓ **Семипалатинск, Аҡмулла өлкәләрендә уларға сиктәш башҡа ҡаҙаҡ ҡәбиләләре араһында Исламиәтте үткәреүгә берҙән-бер сәбәпсе Зәйнулла була. Ҡаҙаҡ халҡы өсөн хәлфәләр әҙерләп биреүҙә Зәйнулла ишандың тырышлығы ҙур була.**



бер йоғонтоло кеше булғанға оҡшай. Аҡкужала Зәйнулла хәҙрәттең шаулатып халыҡ йыйыуы ла кантон башлығының иғтибарынан ситтә ҡалмағандыр. Ошоға бәйле, Зәйнулла хәҙрәт менән Бузыҡаев араһындағы мөнәсәбәттәрҙе киҫкенләштереп ебәргән, әлегә асыҡланып бөтмәгән ваҡиғалар булып ала. "Хәҙрәт халыҡты уҡыта ла, халыҡты дөндерә лә", - тип ялыу яҙалар өҫтөнән.

Хикмәт Зәйнулла хәҙрәттең дини эшмәкәрлеккә яңылыҡтар индереүендә, быны башҡа муллаларҙа ризаһыҙлыҡ тыуҙырыуында ғына түгел. Мәсьәлә күпкә етдиерәк. Ишан үтә лә сетерекле осорҙа, етмәһә, сәйәси-иҡтисади бәрелештәрҙән айырыуса киҫкенләшкән урынында йәшәй. Ҙур аҡыл эйәһе икән, ул ошо тәбәктәге халыҡтың аһ-зарын ишетмәй булмаҫ. Тап ошо дәүерҙә, XIX быуаттың аҙағында, империализм Урал аръяғы райондарына ныҡлап үтеп инә, аҙым һайын завод, приискылар барлыҡҡа килә, башҡорт ерҙәре тартып алына, Зәйнулланың Ҡыуаҡан ырыуы кешеләре лә ерһеҙ ҡалып, Уй, Әғиҙел йылғалары башланған иң ҡулайлыҙ ергә, тау-таш араһына килеп һыйына. Улары ла әле барын-табындарҙыҡы була. Учалы тәбәгенә сит халыҡтар килеп тула, алтын йыуыу кәсәйеү менән бергә, эскелек, хаяһыҙлыҡ, үлтереш көсәйә. Зәйнулла ишан вәғәз уҡығанда был борсолоуҙарҙы туранан-тура, бәлки, әйтмәгәндер ҙә, әммә унын урыҫ хөкүмәтенең милли сәйәсәтен, бөйөк державасылыҡты күрә алмауын халыҡ тоймай булмаҫ. Был, бәхәсһеҙ, губернатор әпкәләйҙәренә шикәйәт яҙыу өсөн нигеҙ була ала.

Журналист Ғәли Сиражетдинов Жәлегерәк миңә бер мәҙәк яҙып ебәргәйне. Зәйнулла ишан Троицкиҙа йәшәгәнендә уға Яуышев, Ғәббәсов кеүек урындағы миллионерҙар, беренсе гильдия сауҙагәрҙәре, урыҫ иҡтисадсылары менән байлыҡ туплауҙа ярыша башлаған, дәүләт банкыһынан аҡса алыу мәсьәләһе килеп тыуа. Ә шәриғәт буйынса процент менән эш итергә ярамай бит инде. Дин хупламай әҙәмдә алдау, отоу юлы менән байыуҙы. Шул уҡ ваҡытта банк ярҙамынан башҡа бер эште лә атҡарып булмай. Ни эшләргә? Бер төркөм башҡорт сауҙагәрҙәре, кәңәш һорап, Зәйнулла хәҙрәткә мөрәжәғәт итә: һеҙҙең фекерегеҙ нисек? Ә ишандың кәңәше бер генә: кафыр иләндә йәшәгәс, кафыр ҡоралы менән файҙаланмау мөмкин түгел...

1884 йылдан Зәйнулла ишан тормошоноң өр-яңы, Троицк осоро башлана. Бында бишенсе жәмиғ мәсет һалдырған Хәбибулла Ғәббәсов хажи мәхәллә кешеләренең теләге буйынса Зәйнулла хәҙрәттең Аҡкужанан Троицкиға килеүен һорай. Ишан был үтенесте йыҡмай, үҙ мәхәлләһенең ризалығы менән 23 апрелдә ҡалаға күсеп килә. Ишан Амур тигән биҫтәлә хеҙмәт итә башлай. Төрлө яҙмаларҙан күренеүенсә, 80-90-сы йылдарҙы тәҙәлөштә көсәйтеү, яңылыҡтар индереү осоро тип атарға мөмкин. Троицкиҙың үҙендә ҡаҙаҡ байы Алтынсарин биргән аҡсаға мәсеттең мәҙрәсәһе һалына. Тәҙәлөштә башлап ебәреү өсөн хәҙрәт үҙе лә аҡса сығарып бирә. Троицк өйәҙендә (уға хәҙерге Учалы районының яртыһы инә - **Автор**) ырамлы бара был эш. Ишандың тыуған яҡтарында ла дини йорттар арта. Мәҫәлән, 1902 йылда Мулдаҡай улысында мәсет тәҙелә.

Тәҙәлөшкә ни өсөн айырым әһәмиәт бирелә һуң? Быны аңлау өсөн XIX быуат аҙағында Троицкиҙың мәртәбәһен белергә кәрәк. Берҙән, ул - башҡорттар күп йәшәгән өйәҙ үҙәге, икенсенән, сиктәш киң ҡаҙаҡ халҡы донья күрә. Етмәһә, ҡала Азия ҡитғаһының алыҫ тәбәктәренән килгән юлдарҙың өҫтөндә ултыра, сауҙагәрлек итеү, каруандарҙың ял итеү үҙәге булып тора. Бында ойошторолған Бөтөн Рәсәй йәрминкәләре үҙҙәренең байлығы, ҡеүәте менән данлыҡлы Нижний Новгород, йәиһә Ирбит йәрминкәләренән һис тә ҡалышмай. Йәрминкә генәме һуң! Сит-ят ерҙәрҙән төрлө милләт килмешәктәренең ағымы көсәйә.

Зәйнулла хәҙрәттең ниндәйҙер кимәлдә ошо күренештәргә ҡағылышлы булған, ҡулдан яҙылған бер нәсихәте табылды (ул Зәки Вәлидиҙең Өфөлә йәшәгән һеңлеһе Сара апай Вәлиеваға һаҡланған). "...Күҙе бар - күрһен, ҡолағы бар - ишетһен!" тип аталған ошо ҡомартҡыла быва ниндәй юлдар бар: "Дингеҙ кеүек йәйелеп ятҡан башҡорт сәхрәләренә хохол үә латыштар тула башланы. Һәр нәрһә баһаланды (хаҡ ҡуйылды, тип аңларға кәрәк - **Автор**), донъя көтөүҙәре ауырлашты..."

Зәйнулла ла, мәҙрәсә һалышҡан Алтынсарин да шуны аңлай: ҡаҙаҡтар араһына ла урыҫ теле бик йылдам үтеп инә. Телдең үтеүе, бер яҡтан, яҡшы ла һымаҡ, сөнки аралашыу өсөн мөмкинлек киңәйә, әммә халыҡтың яйлап урыҫлаша барыуы борсолдора уларҙы. Был һөжүмгә ҡаршы ҡуйырлыҡ бер генә ысул бар - Ислам динен таратыу. Ошо маҡсат менән Зәйнулла Рәсүли ҡаҙаҡ далаларына үҙенең шәкерттәрен күпләп сығарырға тотона. Троицкиға уҡырға килеүселәрҙең барған һайын артыуы ишан ниәттәренең бойомға ашыуы хаҡында һөйләй. Ғәмәлдә шулай килеп сыға ла: әгәр Исламиәтте таратыуҙа Әстерхан, Ырымбур далаларында Стәрлетамаҡ, Стәрлебаш шәйехтәре ҙур хеҙмәт күрһәтһә, Семипалатинск, Аҡмулла өлкәләрендә уларға сиктәш башҡа ҡаҙаҡ ҡәбиләләре араһында Исламиәтте үткәреүгә берҙән-бер сәбәпсе Зәйнулла була. Шулай итеп, ҡаҙаҡ халҡы өсөн хәлфәләр әҙерләп биреүҙә, ҡаҙаҡ ҡәрҙәштәргә Ислам динен өйрәтерлек башҡорт, татар шәкерттәрен сығарып ебәреүҙә, улар менән етәкселек итеүҙә Зәйнулла ишандың тырышлығы ифрат ҙур була. 1905 йылға мәҙрәсәнең матди хәле лә арыу ғына була. Урындағы хәлле кешеләрҙең ярҙамы менән ағас йорт урынына таштан ике ҡатлы яңы уҡыу йорто һалына. Мәҙрәсәнең китапханаһы, ятағы, ашнағы менән ашханаһы, ишек алдында амбарҙары, ҡаралтылары була. Мосолман халыҡтарының урыҫлашыуына нисек тә булһа кәртә ҡуйыу теләгенән милләттәрҙе бергә туплау, шәкерттәрҙә әхлаҡ ҡанундары тәрбиәләү, яңыса уҡыу индереү хәстәрлектәре күрелә.

Зәйнулла ишан хаҡында табып булған иҫтәлектәргә күҙ йүгертеп сыҡҡанда унын уҡымышлы һәм ҙур аҡыл эйәләре менән аралашып йәшәүе һәм Ислам дине сиктәрендә генә бикләнмәүе күренә. Ул беренсе сиратта, әлбиттә, Троицк, Верхнеуральск, Силәбе муллалары менән тығыҙ бәйләнештә булһа, икенселәре менән, әйтәйек, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев, Урта Азияға киткән Рахманҡолов менән хат алышып, нәшерҙән сыҡҡан яңы китаптар алдырып торған, өсөнсөләренең - Ғәбделнасир Ҡурсаи, Шиһабетдин әл-Мәржәни тәрикәттәренә тоғролоҡ һаҡлап, халыҡ араһында уларҙың исемдәрен пропагандалай.

Ишан менән йыш осрашып, унын йоғонтоһонда, унын ярҙамын тойоп йәшәгән бик күп хәлфәләр, шағирҙар, мөхәррирҙәр араһынан Мифтахетдин Аҡмулланы айырым әйтеп үтергә кәрәк. Зәйнулла ишандың байтаҡ ейән-ейәнсәрҙәре менән хат алышырға тура килде. Уларҙың күбеһе ошо ике арҙаҡлы шәхес - Зәйнулла ишан менән Аҡмулла арһындағы дуҫлыҡҡа баҫым яһай. Атилла Расих та был хаҡта хәбәр итте. Ул үҙенең "Ишан ейәне" тигән романында түбәндәгеләрҙе яҙҙы: "Татар, башҡорт, ҡаҙаҡ шағиры мәшһүр Аҡмулланың Зәйнулла бабайҙың яҡын дуҫы булғанлығы мәғлүм. Миңә бабамдың был ирек һөйөүсе шағирҙы яҡын күргәнлеге, һәр даим уға химая ҡылыуы ла билдәле. Аҡмулла үҙенең һуңғы сәфәренә сығыр алдынан Зәйнулла хәҙрәт уға ат бүләк итә..."

Зәйнулла Рәсүлиҙең үҙ дәүеренең алдынғы кешеләре менән тығыҙ бәйләнештә булыуы, һис шикһеҙ, унын эстетик, фәлсәфәүи ҡараштарын билдәләй һәм уны донъяуи эштәргә этәрә. Ишандың өйәҙҙә халыҡ аҡсаһына мәсеттәр генә түгел, ә бик күп мәҙрәсәләр ҙә астырыуы, уҡытыуға төрлө фәндәр индереүгә ынтылыуы шуның менән аңлатыла.

**Рәүеф НАСИРОВ.**
**("Шәйех Зәйнулла Рәсүлев" әҫәренән ҡыҫҡартып алынды. Аҙағы. Башы 11-се һанда).**

*ҮӘТ БИТ ӘЙ!*

# БРОНЗА БЫУАТЫ ҺАУЫТЫ



**Башҡортостандың халыҡ артисы Вәхит Хызыров беҙҙең дәүергә тиклем II мең йыл элеккә ҡараған боронғо һауыт тапҡан. Танылған йырсы уны үҙенең тыуған ауылы Әбйәлил районы Таштимер ауылы янында көтмәгәндә табып алған.**

"Балсыҡтан эшләнгән һауыт өй төҙөгән саҡта килеп сыҡты. Ул бик яҡшы торошта һаҡланған - был үтә неская эш, унда арый символикаһына оҡшаған орнамент бар. Һауыт яҡынса 8-10 литрлыҡ. Белгестәр уны бронза быуатына ҡарай тине", - тип һөйләне Вәхит Хызыров. Археологик табылдыҡты артист республиканың Милли музейына тапшырҙы. Хәҙер ул музей фондында һаҡлана. Һис шикһеҙ, бронза быуатына ҡараған һәм үҙенсәлекле һаҡланған һауыт Башҡортостан Республикаһы Милли музейының "Археология" коллекцияһы биҙәгенә әйләнәсәк, тип хәбәр итте күргәҙмәләр бүлеге мөдире Алһыу Мөфтәхова.

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

## Башҡорт-болғар концепцияһы

Танылған ғалимдарҙың, яҙыусыларҙың һәм шағирҙарҙың исемен килтереүҙе дауам итәбеҙ:

- Таһир әл-Болғари (XI -XII б.б. табип, Хәмит бин Иҙристың дуҫы, унын менән университетта уҡыта, әмир Ҡолондо, Анбал батшаны, Юрий Булгаракты (күрәһең, Юрий Долгорукийҙы), Владимир Мономахты дауалай. Унын китабы "Йәнде һәм тәнде дауалау" (1086 й.) тип атала;
- Мәсем хан - ун ике башҡорт ҡәбиләһе союзының юлбашсыһы;
- Мөйтән бей, Сыңғыҙхан алдында башҡорттарҙың хоҡуғын даулаусы бей;
- Урта быуатта күп кенә болғар-башҡорттар яҙмыш тарафынан ғәрәп илдәренә барып сыға. Морат Рәмзи үҙенең "Тәлфиҡ әл әхбәр" китабында ике башҡорт мәмләүге хаҡында яҙып ҡалдыра. Уларҙың береһе - Ғилмитдин Сәнжәр әл-Башҡорди, ул XIII быуаттың 80-90-сы йылдарында Египетта әмир булып тора. Икенсеһе - шағир Насретдин әл Насри. Хеҙмәте буйынса үрләп, ул хаким булып китә, әмирҙәрҙең хөрмәтенә лайыҡ була. Шиғырҙар һәм проза ижад итә;
- Иранда илхан, Египетта һәм Иранда мәмлүк булып тороусы танылған башҡорттар араһында Ғазан хан дәүерендә Анатолийҙа Сүләмиштың ихтилалын баҫтырыусы әмир Сарҡан һ.б.;
- 1080 йылда Биләр ҡалаһында беренсе "Мөхәммәт-Баҡирия" университеты асылып, башҡорт Яҡуб ибн Ноғман унын ректоры булып китә. Ә Оло Болғар ҡалаһында "Принцтар мәктәбе" асыла. 1153-1166 йылдарҙа был мәктәптә Шаҙый бек етәкләй, ул буйға оҙонлоғо һәм көслө булыуы менән айырылып тора. Унын бер туғаны Ғабдулла Умум шағир һәм ғәскәр башлығы булып китә;
- Әбди вариҫтарына шулай уҡ бөйөк тарихсы, "Нариман тарихы" (1391 й.) авторы Даши Ҡарағай әл Болғари ҡарай;
- күренекле башҡорт-болғарҙар исемлегендә шулай уҡ Бахши Иман Иманай бар, унын "Йәғәфәр тарихы",1680 й.; "Әмир Йәғәфәргә хат", "Ике баш дастаны", 1693 й. (поэманың бер өлөшө 1940 й. "Иҙеүкәй" исеме аҫтында баҫыла) барлығы билдәле;
- 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында башҡорт халҡының батыры, шағир Салауат Юлаев дан ҡаҙана. Ул үҙенең Башҡорт тархандары нәҫеләнә ҡарауы хаҡында белдерә. "Болғар тарихы һәм мәҙәниәте хәбәрсеһе" гәзите (1991, № 2 (4) шулай тип яҙып сыға: "Пугач ихтилалы башланғас, Салауат уға Башҡорт тархандарының болғар нәҫеләнә ҡарауы хаҡындағы документ менән килә";
- Төрки телле халыҡтарҙың ғорурлығы, мәшһүр шағир Ғабдулла Туҡайҙың тамыры башҡорттар менән бәйле булыуы хаҡында "Киске Өфө" гәзите (2001 й., № 17) яҙып сыҡты. Әхәт Сәлихов үҙенең "Ғабдулла Туҡайҙың әсәһе тураһында" тигән мәҡәләһендә Туҡайҙың әсәһе яғынан ҡартатаһы Зиннәтулланың гәйнә башҡорто булып, Уса өйәҙе Пермь губернаһының Ҡужамаҡты ауылында тыуыуы тураһында яҙа. Ғ. Туҡайҙың башҡорт тамырҙары тураһында 1930 йылда "Белем" журналында ла яҙыла.

**(Аҙағы).**

*✓ Әммә, бәхеткә күрә, бөтә фотографиялар ҙа юҡ ителмәгән икән. Вәлиди төшкән бер һүрәт уның арҙаҡлы көрәштәштәре, яҡташтары данлы Ишмырҙиндарҙың нәҫелдәрендә һаҡланып ҡалған.*



# Әхмәтзәки Вәлидиҙең

**Фотографиялар тарихты өйрәнеүҙә ҡиммәтле сығанаҡтарҙың береһе булып тора. Улар аша беҙ үткәндәрҙәге тарихи ваҡиғалар, билдәле шәхестәрҙең тормошо тураһында бай мәғлүмәт ала алабыҙ. Ғөмүмән, фотография тарихты объектив күҙалларға мөмкинлек бирә. Шуға күрә лә табылған һәр тарихи фотография үҙе бер асыш булып тора. Бигерәк тә ул билдәле тарихи ваҡиға йәки арҙаҡлы шәхестәр менән бәйле булһа.**

Мәҫәлән, башҡорт халҡының бөйөк улы, Башҡортостан Республикаһына нигеҙ һалыусы Әхмәтзәки Вәлидиҙең автономия өсөн көрәш осорондағы фотографиялары күп тип әйтә алмайбыҙ. Әлегә тиклем уның ошо осорға ҡараған 3 фотографияһы билдәле. Өсөһө лә Вәлидиҙең "Хәтирәләре"ндә баҫылған. Береһендә ул хәрби кейемдә төшкән. Был фотография 1919-1920 йылдарға ҡарай. Был осорҙа Әхмәтзәки Вәлиди Башҡортостандың хәрби комиссары булараҡ, ғәскәр эштәре менән мәшғүл була һәм, әлбиттә, хәрби кейемдә йөрөй. Ә ҡалған ике фотоһында Әхмәтзәки Вәлиди беҙҙең күҙ алдына Башҡортостан хөкүмәтенең рәйесе булараҡ баҫа. Унда ул хәрби кейемдә түгел, ә штатский кейемендә (костюмда). Фотографияларҙың береһендә уның төшөрөлгән урыны һәм ваҡыты билдәле: Стәрлетамаҡ ҡалаһы, 1920 йылдың 25 феврале. Икенсеһендә 1920 йылдың ҡышы, тип билдәләнгән. Уныһы ла шул ваҡытҡа ҡарайҙыр, тип уйлайым. 1920 йылдың ғинуарында Башҡортостан хөкүмәте рәйесе Харис Йомағолов коммунистар менән даулашып, Мәскәүгә саҡыртып алынғас, уның урынына хөкүмәт рәйесе итеп Әхмәтзәки Вәлиди һайлана. Йәғни Вәлиди хәҙер хәрби комиссар ҙа һәм хөкүмәт рәйесе лә булып китә. Тап ошо осорҙа Башҡортостандың баш ҡалаһы Стәрлетамаҡта төшкән фотолар былар.

Әммә Әхмәтзәки Вәлидиҙең көрәштәштәре менән төшкән бер фотографияһы ла әлегә тиклем осраған булманы. Милли хәрәкәт эшмәкәрҙәре төшкән коллектив фотографияларҙа ла ул күренмәй. Бының сәбәптәре нимәлә һуң? Вәлиди фотографияға төшөргә яратмағанмы? Юҡ, улай түгел, әлбиттә. Фотографиялар булған, әммә, 1920 йылда большевиктарҙың алдаҡ сәйәсәтенә ҡаршы ризаһыҙлыҡ белдереп Төркөстанға сығып киткәс, ул большевиктарҙың дошманына әүерелә. 20-се йылдар аҙағында советтар уның Башҡортостанда ҡалған көрәштәштәрен эҙәрлекләй башлай. Бындай ситуациялар элекке милли хәрәкәт эшмәкәрҙәрен Вәлиди менән бергә төшкән фотоларҙы йәшерергә йәки юҡ итергә мәжбүрләй. Сөнки был фотографиялар уларҙы "Вәлидиселектә" ғәйепләүҙә төп сығанаҡҡа әйләнәсәге көн кеүек асыҡ була. Шул сәбәпле, Башҡортостанда Вәлидиҙең көрәштәштәре менән төшкән бер фотографияһы ла ҡалмай.

Әммә, бәхеткә күрә, бөтә фотографиялар ҙа юҡ ителмәгән икән. Вәлиди төшкән бер һүрәт уның арҙаҡлы көрәштәштәре, яҡташтары данлы Ишмырҙиндарҙың нәҫелдәрендә һаҡланып ҡалған. Әүхәҙей һәм Сөләймән Ишмырҙиндар Ишембай районы Кинйәбулат ауылынан. Беренсе донъя һуғышынан офицер булып ҡайтҡас, Башҡортостан автономияһы өсөн көрәшкә ҡушылалар. 1918 йылда Әүхәҙей Ишмырҙин 6-сы Башҡорт уҡсы полкы, ҡустыһы Сөләймән - 1-се Башҡорт уҡсы полкы менән етәкселек итә. 1919 йылда Ҡыҙылдар яғына сыҡҡас, Әүхәҙей Ишмырҙин Әхмәтзәки Вәлидиҙең урынбаҫары, йәғни Башҡортостандың хәрби комиссары урынбаҫары булып хеҙмәт итә. Әүхәҙей башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороу эше менән туранан-тура етәкселек итә. Әхмәтзәки Вәлиди был осорҙа дөйөм дәүләт эштәре менән мәшғүл була. 1920 йылдың мартында Әхмәтзәки Вәлиди Мәскәүгә саҡыртып алынғас, Әүхәҙей Ишмырҙин Башҡортостандың хәрби комиссары вазифаһын башҡара. Вәлиди үҙенең хәтирәләрендә уны Башҡортостандың хәрби комиссары, тип яҙа. Ҡустыһы Сөләймән ҡыҙылдар яғына сыҡҡас, шулай уҡ 1-се Башҡорт уҡсы полкы командиры вазифаһында була. 1919 йылдың йәйендә башҡорт полктары Көньяҡ фронтҡа (Украина) Деникинға ҡаршы ебәрелгәс, унда Айырым Башҡорт бригадаһы менән етәкселек итә. Аҡтар менән ҡанлы яуҙарҙа ҡатнаша. Ул башҡорт ғәскәре һалдаттарында оло ихтирам ҡаҙана. Әхмәтзәки Вәлиди Сөләймән Ишмырҙинды Көньяҡ фронттан Башҡортостанға ҡайтарта. Бында уны яңы ойошторолоп ятҡан 3-сө Башҡорт кавалерия полкына командир итеп тәғәйенләй. Башҡорт һалдаттары уны кире фронтҡа ҡайтарыуҙы һорап, Башҡортостан хөкүмәтенә мөрәжәғә итә. Был осорҙа башҡорт ғәскәрҙәре Петроградҡа ебәрелә, ә С. Ишмырҙин республикала ғәскәрҙәрҙе аҙыҡ-түлек тәьмин итеү эше менән шөғөлләнә.

Петроградта башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороуҙа Әүхәҙей Ишмырҙин ҙур фиҙаҡәрлек күрһәтә. Юденич армияһы ҡыйратылғас, Михаил Калинин РСФСР хөкүмәте исеменән Әүхәҙейгә исемле ҡылыс бүләк итә. 1920 йылда Совет хөкүмәте 1919 йылдағы Килешеүҙе боҙоп, Башҡортостан мөхтәриәтенең хоҡуҡтарын милли-мәҙәни автономия кимәленә ҡалдырғас, Әхмәтзәки Вәлиди һәм уның көрәштәштәре большевиктарға протест белдереп, эштәрен ҡалдырып, Төркөстанға сығып китә. Вәлиди менән Әүхәҙей Ишмырҙин да китә, Сөләймән тороп ҡала. 1922 йылда Әүхәҙей һәләк була. Уның улы Исхаҡты ҡустыһы Сөләймән тәрбиәләй. Башҡортостанда "болоттар" ҡуйыра башлағас, Мәскәүгә китә. Әммә бында ла Сталин репрессияһынан ҡотола алмай. Сөләймән менән Әүхәҙей Ишмырҙиндың фотографиялары, документтары Ишембай районында ағалары Ишбулды Ишмырҙиндың улдары-ейәндәрендә һаҡланып ҡала. Ишбулды Ишмырҙин үҙе лә 30-сы йылдар репрессияһы ҡорбаны була.

Былтыр, Башҡортостан Республикаһына нигеҙ һалған 100 шәхес проекты сиктәрендә Ырымбур өлкәһе Мерәҫ ауылында милли хәрәкәт эшмәкәрҙәре Сәғит Мерәҫов менән Кәрим Иҙелғужинға таҡтаташ асҡан мәлдә, Ишмырҙиндарҙың яҡташы, ауылдашы Гөлимә апай Жанғабилева менән Ишмырҙиндарҙың исемдәрен мәңгеләштереү тураһында фекер алышҡайныҡ. Гөлимә апай Ырымбур ҡалаһында "Каруанһарай" башҡорт йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе. Заманында даулашып, Ырымбурҙағы данлы Каруанһарай мәсетен башҡорттарға ҡайтарған арҙаҡлы апай. Бөгөн "Каруанһарай" ойошмаһына етәкселек итә. Ул хәҙер Ишмырҙиндарҙың исемен мәңгеләштереү идеяһы менән янып йөрөй. Кинйәбулат ауылы ҡыҙы булараҡ, уларҙың нәҫелдәре менән яҡшы таныш икән. Гөлимә апай миңә Ишмырҙиндарҙың ейәндәрендә һаҡланған ҡыҙыҡлы фотолар ебәрҙе. Шуларҙың иң ҡиммәтлеһе, әлбиттә, Әхмәтзәки Вәлиди көрәштәштәре менән төшкән фото булып сыҡты. Мин милли хәрәкәт темаһы менән 15 йылдан ашыу шөғөлләнәм, бигерәк тә фотоһүрәттәргә иғтибар итәм. Әммә, үрҙә әйтеп үтеүемсә, Вәлидиҙең арҡаҙаштары менән төшкән бер фотоһын да осратҡаным юҡ ине.

Бына, ниһайәт, үҙемә тарихи асыш яһаным. Фотография бик ҡыҙыҡ булып сыҡты. Унда автономия тип янып йөрөгән ирҙаматтары, тәбиғәт ҡосағында, ялда төшкән. Граждандар һуғышы барған осорҙа бындай күренеште күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын, әлбиттә. Әммә, ниндәй генә ауыр, ҡатмарлы,



✓ *Юрматы кантоны хәрби комиссары, августан Тамьян-Ҡатай кантоны хәрби етәксеһе була. 1920 йылда Вәлиди менән киткән, ахыры. Һуңынан Төркиәлә йәшәй. Вәлиди яҙыуынса, 60-сы йылдар аҙағында Анкарала вафат булған.*

# БИЛДӘҺЕҘ ФОТОГРАФИЯҺЫ

һуғыш шарттарында ла ябай тормош дауам иткән. Кешеләр күңел асырға ла ваҡыт тапҡан. Шунһыҙ, әҙәм балалары бөтөнләй кешелек сифатын юғалтыр ине, моғайын. Шулай итеп, беҙ бында бөйөк Әхмәтзәки Вәлидиҙе үҙенең көрәштәштәре менән күрәбеҙ. Был фотография ҡайҙа, ҡасан төшөрөлгән, унда ниндәй байрам, күңел асыу һүрәтләнгән һуң, тигән һорау тыуа. Сөнки был фотография тураһында бер ниндәй ҙә мәғлүмәт юҡ. Мәғлүмәт булмаһа ла, милли хәрәкәт тарихы менән байтаҡ шөғөлләнгән кеше булараҡ, был фотографияның ҡайҙа һәм ҡасан, ни сәбәпле төшөрөлгәнен бер күреүҙә аңланым. Был фотоға асыҡлыҡ индергән мәғлүмәтте Әхмәтзәки Вәлидиҙең хәтирәләренән табырға була. Унда "Саранскиҙа Исмәғил Муһлиә менән Мәрйәм ханымдың туйы" исемле фотография бар. "Бөгөн Мордва йөмһүриәтенең үҙәге булған Саранскиҙа беҙ ҙур ауырлыҡтар кисереп хәлһеҙләнгән ғәскәрҙәребеҙҙе тәптипкә килтереү менән шөғөлләндек. Ғәскәр составындағы 1-се һәм 2-се йәйәүле, 1-се һәм 2-се кавалерия полктары хеҙмәтте ҡәҙимгесә дауам итте. Йыйылыштар, күңел асыуҙар, туйҙар уҙғарылды. Икенсе рәсемдә һүрәтләнгән, юғары белем алған балалары менән бергә Анкарала йәшәүсе Исмәғил Муһлиә менән Әфифә (фотола Мәрйәм тип яҙылған) ханымдың никахы айҡанлы тантана булды", - тип яҙа Вәлиди хәтирәләрендә. Һүрәттә Башҡортостан хөкүмәте ағзалары, башҡорт ғәскәрҙәре офицерҙары төшкән. Фото 1919 йылдың май айында төшөрөлгән булһа кәрәк. Тарихтан билдәле булыуынса, 1919 йылдың яҙында Колчак һөжүмгә күскәс, Башҡортостан хөкүмәте март аҙағында Темәстән Мораҡ ауылына (хәҙерге Күгәрсен районы үҙәге), шунан Иманғол ауылына (Ырымбур өлкәһе) күсә, артабан Тоцкий ауылына барып урынлаша. Апрель аҙағында Саранск ҡалаһына эвакуациялана. Хөкүмәт менән бергә ғәскәрҙәр ҙә китә. Башҡортостан хөкүмәте был ҡалала өс ай, 1919 йылдың май, июнь һәм июль айҙарында була. Август башында Стәрлетамаҡҡа ҡайта.

Тимәк, 1919 йылдың май айында Саранск ҡалаһында Исмәғил Муһлиә менән Мәрйәм ханымдың туйын байрам иткәндәр булып сыға. И. Муһлиә Әхмәтзәки Вәлидиҙең адъютанты була. Вәлиди төшкән фотографияла тап ошо туйҙың дауамы булһа кәрәк. Йәғни туй барышында бер төркөм башҡорт эшмәкәрҙәре һәм офицерҙары ҡырға сыҡҡан булһа кәрәк.

Ә хәҙер фотографияла һүрәтләнгән кешеләргә күсәйек. Уртала беҙ Әхмәтзәки Вәлидиҙе күрәбеҙ. Ул ҡулына ҡалаҡ һәм йомортҡа тотҡан. Алда кәрзин өҫтөндә йомортҡа һалынған һауытты ла күрергә була. Вәлиди, ғәҙәттәгесә, хәрби кейем, гимнастерка кейгән. Башҡортостандың хәрби комиссары шулай кейенергә тейеш, әлбиттә. Был фотографияла тағы кемдәр һүрәтләнгән һуң? Баҫып торғандар араһында һулдан өсөнсө Вәлидиҙең яҡын көрәштәштәренең береһе Хәлим Насретдин улы Әмиров тора. Ул бик ғорур ҡиәфәттә баҫып тора, уң терһәген күршеһенең яурынына, ә һул ҡулын бөйөрөнә ҡуйған. Түшендә Ҡыҙыл Армия офицеры билдәһе. Хәлим Әмиров төньяҡ-көнбайыш башҡорттарынан сыҡҡан милли хәрәкәт эшмәкәре, уран ырыуы башҡорто. Хәҙерге Яңауыл районына ҡараған Яңы Уртауыл ауылынан. 1918 йылда Башҡортостан хөкүмәтенең мәғариф бүлеге етәксеһе урынбаҫары булып эшләй. Ул үҙен яҡшы оратор, яҙышыуға оҫта сәйәси эшмәкәр итеп таныта. 1919 йылда ҡыҙылдар яғына сыҡҡас, Саранскиҙа Вәлиди уны Айырым Башҡорт бригадаһының сәйәси комиссары итеп тәғәйенләй. Башҡорт ғәскәрҙәре составында 1919 йылдың йәйендә Көньяҡ фронтта Деникинға ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнаша, шул уҡ йылдың көҙөндә Башревком уны Петроградҡа тупланған башҡорт ғәскәрҙәренә етәксе итеп тәғәйенләй. Хәлим Әмиров Башҡортостан хөкүмәтенең хосуси вәкиле булараҡ ғәскәр ойоштороу, уларға етәкселек итеү эше менән мәшғүл була. Петроградтағы башҡорт ғәскәрҙәрен сәйәси йәһәттән нығытыу өсөн күп көс һала. Мәскәүҙә уҡып йөрөгән башҡорт курсанттарын, Петроградҡа һоратып алып, уларҙы сәйәси вазифаларға тәғәйенләй. Мәҫәлән, Һиҙиәтулла Сәғәҙиев Башҡорт кавалерия дивизияһының сәйәси бүлеге мөдире итеп ҡуйыла, Ғабдулла Ибраһимов (яҙыусы Ибраһим Ҡыпсаҡ) Башҡорт уҡсы бригадаһының комиссары булып китә. Быйыл "У истоков Башкирской республики" китабында уның тураһында яҙып сыҡҡайным инде. Быйыл, Хәлим Әмировтың яҡташтары, Яңауыл районы башҡорттары ҡоролтайы уға Яңы Уртауыл ауылында таҡтаташ асырға ниәтләй.

Фотографияла Хәлим Әмировтың эргәһендә Вәлидиҙең тағы бер яҡын арҡаҙашы һүрәтләнгән - үрҙә телгән алынған Әүхәҙей Ғәләүетдин улы Ишмырҙин. 1919 йылдың яҙында ул Зәки Вәлидиҙең урынбаҫары булып хеҙмәт итә. Башҡорт ғәскәрҙәренә дөйөм етәкселек, уларҙы ойоштороу, тәьмин итеү эше менән Әүхәҙей Ишмырҙин шөғөлләнә. Фотонан күренеүенсә, ул оҙон буйлы ир-уҙаман булған. Өҫтөнә, ғәҙәттәгесә, гимнастерка түгел, ә ҡара пинжәк һәм аҡ күлдәк кейгән. Түшендә Ҡыҙыл Армия офицеры билдәһе лә күренмәй. Тимәк, туйға байрамса кейенгән. Ҡулына стакан менән сәй тотҡан. Баҫып тороусылар араһында ундан бишенсе ҡатын-ҡыҙ артында ҡулын ҡулына ҡуйып торған ир-уҙаманы шулай уҡ Вәлидиҙең яҡын көрәштәштәренең береһе, 2-се Башҡорт уҡсы полкы командиры Ибраһим Ейәнбай улы Исхаҡов. Офицер, башҡорт армияһының штабс-капитаны. Уны Вәлидиҙең тәнһаҡсыһы булған тип тә яҙалар. Ибраһим Исхаҡов Стәрлетамаҡ районы Мырҙаш ауылынан. Был ауыл данлы Ҡаһым түрәнең (Ҡасим Мырҙашевтың) атаһы Мырҙаштың исемен йөрөтә. И. Исхаҡов 1918 йылдың ноябрендә 2-се Башҡорт уҡсы полкы командиры итеп тәғәйенләнә. Башҡортостан мөхтәриәтен һаҡлап, күп кенә яуҙарҙа ҡатнаша. Ҡыҙылдар яғына сыҡҡан, үҙенең полкы менән Деникинға ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнаша, 1919 йылдың көҙөндә Петроградты Юденич армияһынан ҡурсалай, яралана. 1920 йылдың яҙында Әхмәтзәки Вәлиди Мәскәүгә саҡыртып алынып, Башҡортостанға ҡайтырылғас, Әүхәҙей Ишмырҙин республиканың хәрби комиссары вазифаһын башҡара. Үҙенең ярҙамсыһы, урынбаҫары итеп Ибраһим Исхаҡовты тәғәйенләй. Шул уҡ йылдың июнендә Үҙәк власть Башҡортостан мөхтәриәтенең хоҡуҡтарын бөтөргәс, ризаһыҙлыҡ белдереп, икеһе лә Әхмәтзәки Вәлиди янына Төркөстанға сығып китә.

Ибраһим Исхаҡов тәжрибәле офицер булараҡ, Төркөстанда офицерҙар курсы ойоштора, курсанттарҙы хәрби эшкә өйрәтә. 1921 йылда Бохара әмире яҡлы баҫмасылар курсанттары менән бергә үлтерелә. И. Исхаҡовтың ғаиләһе Башҡортостанда ҡала. Уның ейәнсәре бөгөнгө көндә Күмертау ҡалаһында йәшәй. 2009 йылда "Киске Өфө" гәзитендә тәүге тапҡыр Ибраһим Исхаҡов тураһында яҙып сыҡҡас, уның ейәнсәре ныҡ ҡыуанғайны. Атайым совет осоронда олатайым Ибраһим Исхаҡов тураһында йәшереп кенә һөйләй торғайны, тип хәтерләне. И. Исхаҡовтың яҡташтары ла күптән уның исемен тыуған ауылы Мырҙашта мәңгеләштерергә уйлай. Башҡортостан Республикаһының 100 йыллығы айҡанлы ниәттәре тормошҡа ашыр, тип өмөт итәм.

Тағы бер фотографияға күҙ һалайыҡ. Ундан өсөнсө (ҡулына стакан менән сәйен тотоп торған) офицер - Хәлил Фәйзрахман улы Әлишев. Батша армияһы подпоручигы. Башҡортостан мөхтәриәтенә фиҙаҡәр хеҙмәт иткән мишәр офицеры, Татарстандың Октябрь районы Иҫке Әлмәт ауылынан. Әлишевтар тамырҙары менән Ҡасим ханлығы мишәрҙәренән (башҡорт булыуы ла ихтимал). Сөнки Ҡасим ханлығында башҡорттар ҙа күпләп йәшәгәнлеге билдәле. "Үҫәргәндәр" риүәйәтендә үҫәргән башҡорттарының Ҡасим ханлығына барып төпләнеүе һәм мишәрҙәрҙең үҫәргән башҡорттары менән туғандаш булыуы тураһында бәйән ителә. Был турала мин заманында "Шоңҡар" журналында яҙып сыҡҡайным. Мишәр офицерҙарының башҡорт милли хәрәкәтендә ҙур ихласлыҡ, фиҙаҡәрлек менән хеҙмәт итеүе билдәле. Оҙаҡ йылдар мишәрҙәр менталитеты буйынса хәрби ҡатлам булараҡ (Башҡорт-мишәр ғәскәрен иҫәпкә алғанда) башҡорт халҡына яҡын торғандарҙыр, күрәһең. Хәлил Әлишев 1918 йылда башҡорт армияһы сафына алына. Тәүҙә Туҡ-Соран кантоны ирекле отряды (милицияһы) етәксеһе булып хеҙмәт итә. 1918 йылдың көҙөнән 2-се Башҡорт кавалерия полкында эскадрон командиры, 1919 йылда башҡорт ғәскәрҙәре ҡыҙылдар яғына сыҡҡас, 2-се Башҡорт кавалерия полкы командиры итеп тәғәйенләнә. Башҡорт бригадаһы составында 1919 йылдың йәйендә Украинала Деникин армияһына ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнаша. Шул уҡ йылдың көҙөндә Реввоенсовет рәйесе Троцкий фарманы буйынса башҡорт ғәскәрҙәре Петроградҡа ебәрелгәс, бында уны Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмө командиры итеп тәғәйенләйҙәр. Фронтта Петроградты һаҡлаған башҡорт ғәскәрҙәренә етәкселек итә. Күп кенә башҡорт милли хәрәкәте эшмәкәрҙәренең яҙмышы кеүек үк, Хәлил Әлишевтың да ғүмере ҡәһәрле 1937 йылда өҙөлә.

Фотографияның уң яғында ҡулына таянып ятҡан башҡорт офицеры Тәкиулла Әбделханнан улы Әлиев. Шулай уҡ Вәлидиҙең яҡын көрәштәштәренең береһе. Минзәлә башҡорттарынан. Яңы Зиәш исемле башҡорт ауылынан. Ҡаҙан хәрби училищеһын тамамлаған, Беренсе донъя һуғышында Кавказ фронтында була. 1918 йылда башҡорт армияһы сафына алына. Ырымбурҙа Карүанһарайҙа Башҡортостан хөкүмәтен һаҡлаған комендант ротаһына етәкселек итә. 1919 йылдың ғинуарында Әхмәтзәки Вәлиди Башҡорт корпусын киренән тергеҙгәс, Т. Әлиевты Башҡорт ғәскәрҙәре Башҡорт корпусы коменданты итеп тәғәйенләй. Ҡыҙылдар яғына сыҡҡас, Әлиев Башҡорт хәрби комиссариатында өлкән адъютант булып хеҙмәт итә. Йәғни Вәлидиҙең ярҙамсыһы була. 1920 йылдың апрелендә уны Мәскәүгә Хәрби академияға уҡырға алалар. Әммә бер йылдан тикшереү барышында уның аҡ армияла хеҙмәт иткәнен белеп ҡалып, Академиянан сығалар. Тәкиулла Әлиев аптырап ҡалмай, Мәскәү университетының электро-техник факультетына уҡырға инә. Башҡортостан хөкүмәтенең ҡушыуы буйынса 1923 йылда Мәскәүҙә тәүге ауыл хужалығы күргәҙмәһендә БАССР павильонын әҙерләүҙә ҡатнаша. Күргәҙмә етәкселеге Әлиевтың хеҙмәтен юғары баһалай, туған халҡының көнкүрешен яҡшы белеүен һыҙыҡ өҫтөнә ала. "За организацию башкирских павильонов, за успешные работы по постройке башкирской усадьбы и за объяснения, являющие большое знание родного быта и сельского хозяйства", тип уға диплом тапшыралар. Университетты тамамлағас, Башҡортостанда һәм СССР-ҙың башҡа төбәктәрендә хужалыҡ эшендә була. 1943-1945 йылдарҙа Свердловск ҡалаһында беренсе троллейбус линияһын төҙөү эшенә етәкселек итә. 1957 йылда ошонда вафат була. 2000 йылда Екатеринбург башҡорттары ҡоролтайы тырышлығы менән ҡалала бер урамға Тәкиулла Әлиев исеме бирелә.

Фотола Тәкиулла Әлиевтың артында был тантананың төп сәбәпселәре - никахлашҡан парҙар Мәрйәм ханым менән Исмәғил Муһлиә һүрәтләнгән. Мәрйәм ханым башына яулыҡ ябынған (ҡатын-ҡыҙҙар янында), иптәше ситтәрәк Т. Әлиевтың янындағы офицерҙың артында ултыра, ҡулына сәй тотҡан булһа кәрәк. Исмәғил Муһлиәнең исеме Әхмәтзәки Вәлиди хәтирәләрендә шулай уҡ йыш телгә алына. Ул Польша мосолмандарынан. Вәлидиҙең яҡын көрәштәштәренең береһе булып тора. Башҡорт милли хәрәкәтендә 1918 йылдың йәйенән, Силәбелә башҡорт армияһы төҙөлә башлаған мәлдән әүҙем ҡатнаша. Батша армияһы поручигы Исмәғил Муһлиә тәүҙә 1-се Башҡорт пехота полкына хеҙмәткә алына. 1918 йылдың 7 июленән Башҡорт хәрби шураһында Вәлидиҙең өлкән адъютанты була, ҡыҙылдар яғына сыҡҡас, Башҡорт хәрби комиссариатында секретарь булып хеҙмәт итә. 1919 йылдың июленән Юрматы кантоны хәрби комиссары, августан Тамьян-Ҡатай кантоны хәрби етәксеһе була. 1920 йылда Вәлиди менән киткән, ахыры. Һуңынан Төркиәлә йәшәй. Вәлиди яҙыуынса, 60-сы йылдар аҙағында Анкарала вафат булған.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

✓ *Ваҡыттың Ел арбаһына ултырғандай еләбеҙ: эштән - өйгә, өйҙән - эшкә. Ирем, яҙыусы Аҫылғужа Баһуманов "Башҡортостан"да эшләп йөрөй. Ишетәм: Сабир ҙа редакцияға эшкә урынлашҡан. Ике һүҙҙең берендә Аҫылғужа уны һөйләй.*



ӘҘИП ХАҠЫНДА ҺҮҘ

# БЕҘҘЕҢ ЕГЕТ УЛ!

**Кешенең тәбиғәтте күрә белеү һәләте уның талантынан, зирәклегенән килә. Яҙыусы Сабир Шәриповтың әҫәрҙәрен ҡабаттан уҡып сыҡтым да быға тағы бер тапҡыр инандым.**

Башҡорт дәүләт университетының филология факультетында Сабирҙың курсы беҙҙән ике йыл түбәнерәк уҡыны. Ятаҡ фойеһында лауылдап, коридорҙарға һыймай шаулап һөйләшеп, унан да көслөрәк көлөп йөрөгәс, һыны ла олпат булғас, Сабирҙы мин яңы ятаҡ хужаһы микән, тип уйлағайным. Бер нисә көндән студенттарҙы - кем йырлай, бейей белә - шуларҙы университеттың ҙур залына йыйҙылар. Барһам, сәхнә уртаһында Сабир ултыра. Күҙен йома биреберәк, шул тиклем әҫәрләнеп, бөтә донъяһын онотоп, баянда уйнай. Яҡын-тирәһендә йыйылған студеттарҙың береһен дә күрмәй, хатта ауыр ғына баянын да тоймай шикелле, уны унға-һулға өҙөп сығарырҙай хәлгә еткереп тарта ла тарта. Баян моңо, Сабирҙың үҙен тотошо мине шул тиклем хисләндерҙе - йырларға тип барһам да, йырларға ҡыйманым. Мин Сабирҙы, талантлы студенттарҙың концертын ойошторор өсөн университетҡа ебәрелгән филармония артисы, тип ҡабул иттем. Бәй, ул Белорет педучилищеһын тамамлап, ике йыл ауылында физкультура һәм йыр дәрестәренән уҡытып, тормошто әҙ булһа ла беҙҙән алдараҡ татыған үҙ егетебеҙ, һабаҡташыбыҙ булып сыҡты. Бер ваҡыт үҙ егетебеҙ бик яҡшы уҡыған, халыҡ йырҙарын матур йырлаған, инсафлы, үтә итәғәтле Зәйтүнә Яхъя ҡызына өйләнмәһенме! Йәш малайҙарса былағайланып, ҡыҙҙар менән шаярып йөрөгән Сабирыбыҙ, бик матур ғаилә ҡороп, Зәйтүнәгә ауыр һүҙ тейҙермәй (етмәһә, икеһе лә ижади кешеләр), балаларын үҫтереп, башлы-күҙле итеп, йәшлек юлдашына һәр ваҡыт тоғро ҡалды.

...Университетты тамамлап таралыштыҡ та киттек. Ваҡыттың Ел арбаһына ултырғандай еләбеҙ: эштән - өйгә, өйҙән - эшкә. Ирем, яҙыусы Аҫылғужа Баһуманов "Башҡортостан"да эшләп йөрөй. Ишетәм: Сабир ҙа редакцияға эшкә урынлашҡан. Ике һүҙҙең берендә Аҫылғужа уны һөйләй ҙә тора. Шашка ярышы комментаторы тиерһең. Кем кемде нисә тапҡыр еңгән, сәмләнеп кем кемдән нисек әҙерәк әсе көлөп алған - бөтәһен дә түкмәйсәсмәй алып ҡайта ла һөйләй. Ул шулай Аҫылғужаға дуҫ булып, һуңғы һулышына тиклем тоғро ҡалды. Ирем мәрхүм булғас та иң беренсе мин уға хәбәр иттем.

...Беҙ "Строительный" түкталышында фатир алғайныҡ. Мин бала менән эшләмәй өйҙә ултырғас, Аҫылғужа бер ялда Сабир менән балыҡҡа китергә булды. Эй, дәртләнеп ҡара таңдан сығып киттеләр. Кис етеп, ҡараңғы төштө. Көтәм юҡ, көтәм юҡ. Аптырамын. Төн уртаһы еткәс кенә бысраның ҡайтып инде Аҫылғужа, ваннаға һыу йыйып, шунда бер тере сортанды төшөрөп ебәрҙе. Эй, матурҡай, иҫен йыйып, ҡыуанып йөҙөргә тотондо! Шыпырҙығын сыға. Ҡарап-ҡарап торҙом да: "Мин быны ашамайым", - тинем. Аҫылғужа тыныс ҡына ашарға ултырҙы. Ул үҙҙәренең кинәйәле һөйләшеп, ял итеп ҡайтыуы хаҡында бик матурлап бәйән итергә керешеп китте. Әммә ошо көндән һуң ул башҡаса балыҡ тоторға йөрөмәне...

...Ә Сабир бөгөн дә һәүәҫкәр балыҡсы, уның эш өҫтәле янындағы стенала балыҡсылар календаре һәр ваҡыт эленеп тора. Беҙҙең тиктормаҫ һабаҡташыбыҙҙың, алыҫ араларҙы гиҙеп, сабыр ғына ҡармаҡҡа эләккән балыҡты көтөп ултырғанын күҙ алдына китереүе лә ҡыйын. Миҙгел үҙгәрешен дә һанламай, ҡайҙа йылға бар, шуны тикшермәй ҡалмай, биле ауыртһа ла һалҡын һыуға төшөүҙән ҡурҡмай. Сабирҙың хикәйәләрен уҡып, балыҡ атамаларын белергә, балыҡ тормошо менән балыҡсы һөнәре нескәлектәрен өйрәнергә, гөмүмән, балыҡсы шөғөлөнә ғашиҡ булырға мөмкин. Кеше һәм тәбиғәт араһындағы мөнәсәбәт, ошо мөнәсәбәтте тасуирлау нигеҙендә геройҙарының сағыу характерҙарын аса белеү - Сабирҙың яҙыусы булараҡ талант емеше.



...Сабир 1989-1990 йылдарҙа Мәскәүҙә, М. Горький исемендәге әҙәбиәт институтында ла уҡып ҡайтты һәм ең һыҙғанып ижад итергә кереште. Имән сәтләүеге мыртҡандар; сыйҙым бөркәнеп ята; өсөкләргә ҡарар итте; атаәсәһенә ожро һалманы; кеше бисәһен ҡыйырлап йөрөмә; яңҡырыҡ бәйләгән; аймап алыу; эш-көшкә тотоноу; ылаш кеүек сабынлыҡ; шар ялан; кәүерт ҡайын ҡиҫәге; һыҙланыуҙан ыҙғырып сығам; иҫке тирүк йәйҙе; утапша һәм башҡа бик күп ерле һөйләш гәүһәрҙәрен әҙәби әҫәрҙәрендә мәңгеләштерә. Әйтем-мәҡәлдәрҙе лә диалогтарҙа мул ҡуллана. Яҙыусы халыҡ легендалары менән ябай тормош сәхифәләрен оҫта биҙәп бара. Бында халыҡ йырҙары, ябай тел менән аңлатылған тарихи ваҡиғалар, дини хөрәфәттәр һ.б. йыш осрай һәм улар кеше яҙмышын, уның характерен асыуҙа мөһим роль уйнай. Урман, йәнлектәр донъяһының, һалсыларҙың, аусы һәм һунарсыларҙың тормош картиналарын мауыҡтырғыс һүрәтләй. Уның геройҙары үҙе кеүек тик тормаҫ, мәңге юлдағы кешеләр.

...Романтик рухлы Сабир "Башҡортостан" гәзите редакцияһында эшләп йөрөгән еренән 1977-1979 йылдарҙа БАМ-да рота командирының сәйәси эш буйынса урынбаҫары булып хеҙмәт итеп ҡайтты. Бармай ҙа ҡала алыр ине, әммә донъя күреү, яҙыусы булараҡ фекер байытыу, тормош тәжрибәһе туплау уны шулай йөрөттө. Яҙыусылар быны "багаж туплау", тип атайҙар. Ысынлап та, БАМ-дан Сабир әр-яңы әҫәрҙәр яҙырлыҡ рухи йөк тейәп ҡайтты. Етмәһә, "Байкал-Амур магистрале өсөн" миҙалы тағып ҡайтып, тағы һушты алды.

...Шәрипов әҫәрҙәрендә тыуған илгә һөйөү күркәм тау-урмандарҙы, ажғыр тау һыуҙарын, тәбиғәт байлыҡтарын һүрәтләү, уларҙы әләф-тәләф итмәү, ҡәҙерләү кеүек геройҙарының хис-тойғолары аша бирелә. Шул уҡ ваҡытта юғалған ауылдар яҙмышы аша ла яҙыусы ошо оло кисерештәрҙе үҙәк өҙгөс картиналарҙа һүрәтләй. Ер-һыу атамаларын да белмәү, уның үткәнен хәтерҙән юйыу, йәштәрҙең ауылды ташлап китеүе, балалар һанының әҙәйеүе, мәҙәниәт һәм аң-белем усаҡтарының ябылыуы һөҙөмтәһендә ғаиләләрҙең тарҡалыуы, милләттең бөтөүенә килтергәнен әҙип ябай тормош ҡатмарлылыҡтары аша оҫта һүрәтләй.

...Сабир Аҫылғужа менәнең һыҙғанып "Китап" нәшриәтендә эшләнеләр, милли китапты байытыуға өлгәштеләр. Нәфис һәм балалар әҙәбиәте бүлеге мөдире булараҡ ул осорҙа "Әҙәби мираҫтан", "Кәрҙәшлек кәштәһе", "Танышайыҡ - тәүге китабым", "Арҙаҡлы шәхестәр тормошонан" исемле бик әһәмиәтле сериялары донъя күрҙе. "Башҡорт халыҡ ижады"ның күп томлығы башҡортса һәм русса нәшер ителде. Ауыр тип тормай, башҡортса "Көрьән" де халыҡҡа еткереүҙә тос өлөш индерҙеләр. Уның айырым әҫәрҙәре рус, украин, немец, татар, сыуаш телдәрендә баҫылып донъя яулай. Төрлө йыйынтыҡтарҙа, альманахтарҙа нәшерләнгәндәре лә байтаҡ. Тарихсы В. Сидоровтың Салауат Юлаев тураһындағы китаптарын башҡортсаға ауҙарып ҡыуандырҙы. Сабир "Ағиҙел" журналы редакцияһына эшкә киткәс, иремдең : "Бер етди һөйләшерлек әҙәм заты ҡалманы нәшриәттә", - тип хафаланған саҡтары йыш булғайны. Был дуҫы адресына әйтелгән баһаһы, тип уйлайым. Өс сезон Яҙыусылар идараһында проза һәм публицистика секцияһын етәкләп, Сабир байтаҡ йәштәрҙе үҫтерҙе. Бөгөн 300-ҙән ашыу сәсмә әҫәр яҙған олпат прозаик "Ағиҙел" журналы редакцияһының проза-публицистика бүлеген етәкләй. "Тауҙарҙағы эҙ" (1982), "Ҡайынлы артылыш" (1985), "Хушлашмайым" (1992), "Старозимовье" (1995), "Аҡ ҡулсатыр" (1998), "Костер на снегу" (Чебоксары, 2001), "Приглашение на чужбину" (2003), "Хушлашмайым" (Ҡаҙан, 2003), "Зәңгәр кәтер" (2008) яҙыусының китап байлығы. Уға тырыш хеҙмәте өсөн 1998 йылда "Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре" тигән маҡтаулы исем бирелде. Тыуған ягын, тау-таш араһында йәшәгән яҡташтарының яҙмышын оҫта сағылдырған Сабир Шәриповты Белорет ҡала-район хакимиәте Яныбай Хамматов исемендәге премия лауреаты итте.

Әҙиптең теләк-фекере киң. "Иң борсоғаны - "үҙгәрештәр": буш вәғәҙәләр, күпселектең бөлә барыуы, әҙселектең кесә ҡалынайтыуы, әхлаҡи ҡиммәттәрҙең осһоҙланыуы... Әҙәбиәттең бурысы ана шул социаль тетрәнеүҙәрҙе, болғауыр реформаларҙы гәҙел һүрәтләүҙән ғибәрәт, тип уйлайым. Дәүер картинаһы итеп тә, идеологик биҙәктәрҙә лә. Донъяуи мәсьәләләрҙе хәл итеү сәйәсәт иңендә ятһа ла, әҙәбиәт, мәҙәниәт һәм сәнғәт был өлкәлә ярҙамсы һәм кәңәшсе, кәрәк икән, көрәшсе вазифаһын үтәргә бурыслы. Әҙәбиәт - фәндәр тупланмаһы, серҙәр уҡмашмаһы, ул кешенең асылын өйрәнеү ролен мәңге үтәһен ине", - тигән кинәйәле маҡсат менән ижад итә яҙыусы.

**Миңниса БАҺУМАНОВА.**

СӘЙЕР ҒӘҘӘТ

## ЙӘ ТӨЙМӘГӘ БӘЙЛӘНӘ,

### йә баштан һыйпай

**Бер әхирәтемдең ҡыҙыҡ ҡына ғәҙәте була торғайны: урамда осратып, һөйләшергә тура килһә, үҙе һөйләп тора, үҙе һинең кофтаның, йәки пальтоның иң беренсе төймәһен эләктереп ала, борғослай башлай, элеп ҡуя, кире ысҡындыра...**

Шуға күрә уны күреү менән мин үҙем дә һиҙмәҫтән усым менән күкрәк тәңгәлен ҡаплап ҡуя торғайным. Ә ул шуны ғына көтөп торған тиерһең: төймәгә бәйләнә алмағас, сәстәренде һыпыра башлай, кейемеңдең яғаһын рәтләп ҡуя, бик булмаһа, ҡулын кеше яурынына һалып, һөйләшеп тора бирә. Әхирәтем холҡо менән бик хәрәкәтсән, сабырһыҙ кеше, уға һәр ваҡыт ниҙер эшләп, башҡарып торорға кәрәк. Ул бер үк ваҡытта шәл бәйләп ултыра, телевизор ҡарай, улына дәрес әҙерләшә ала.

Йәнә бер әхирәтем бер ҡасан да кешенең һөйләп бөткәнен тыңламай, үҙе генә һөйләп ҡалырға тырыша. Телефондан шылтыратһа, йыш ҡына уның менән иҫәнләшеп, һаубуллашып ҡына трубканы һалып ҡуйырға мәжбүрмен - ул хәбәрен тиҙ-тиҙ генә һөйләп, көлөп, шаярып ала ла һөйләшеүҙе тамамлап ҡуя. Ҡайһы саҡ үҙе яңынан шылтыратып, "Онотоп ебәргәнмен, хәлдәрең нисек әле?" тигәнерәк һорауҙар бирергә ярата. Күп һөйләү ғәҙәтен әхирәтем үҙенең өйҙә йыш ҡына яңғыҙы ултырыуы, кеше менән аралашыу теләгенең көслө булыуы менән аңлата. Бөтә эштәрҙе лә ҡабалан-ҡабалан эшләгәнгә күрә, бер үк нәмәне ике, хатта өс-дүрт тапҡыр эшләргә тура килә. Бер тапҡыр баҙарҙан туфлиҙар алып ҡайтҡан да, минә күрһәтә. Ҡабаланыу арҡаһында бер үк төҫтәге, әммә төрлө размерлы аяҡ кейеме алып ҡайтҡан икән.

Тағы ла бер әхирәтем үҙенең сәйер ғәҙәте менән барыһын да тиерлек уҙҙыра - ул өйөнә ҡайтып инеү менән ишек төбөндә торған килеш тиерлек пальтоһын, шарфын, күҙлеген, күлдәген сисә лә, шунан ғына итеген һалып, төпкө бүлмәгә үтә. Шулай бер мәл тулыһынса сисенеп, төпкә үтһә, ситтән кешеләр килеп, ҡунаҡ булып ултыралар икән. Әхирәтем тыштан ни өсөн ярым яланғас килеп ингәнен аңлата алмай йонсоған. Ул бөтә нәмәне лә саманан тыш арттырып үтәргә ярата. Студент йылдарында әллә ҡайҙан дөрөҫ тукланыу ҡағиҙәләрен табып, шуларҙы оло яуаплылыҡ менән үтәп, дауаханаға эләкте.

Үҙемдең дә сәйер ғәҙәттәрем юҡ түгел. Студент йылдарында имтихан биргәндә һәр ваҡыт тиерлек өсөнсө кеше булып инә торғайным - өс һаны минең яратҡан һаным да булғаны өсөн түгел, ә, нишләптер, өсөнсө булып инһәм, имтиханды "бишле"гә генә тапшырырмын кеүек була торғайны.

Йәнә бер сәйер ғәҙәтем - үҙемдең һәр ваҡыт яңғыҙлыҡҡа ынтылыуымда... һәм унан ҡасыуымдалыр. Мин бер үк ваҡытта яңғыҙ ҡалырға, китаптар менән булышып ултырырға, ниҙер һыҙырға, яҙырға яратам, тик шул уҡ ваҡытта минә эргәмдә, өндәшмәй ултырһа ла, кешенең барлығын тойоу мөһим. Кистәрен бүлмәлә яңғыҙым ғына ҡалырға, бер үҙем ҡараңғыла йоҡларға яратмайым.

Әйткәндәй, сәйер ғәҙәт һәр кемдә лә бар инде ул. Ошо рубриканы асҡанда беҙ уҡыусыларыбыҙҙың да үҙҙәре хаҡында сер уртаҡлашыуына, ғәҙәт-ҡылыҡтары тураһында һөйләүенә иҫәп тотҡайныҡ. Хаттар көтәбеҙ һеҙҙән.

**Ләйлә ҒАЙСАРОВА.**

✓ *Көндәлек тормошта ваҡыт шулай бүленергә тейеш: бер өлөшө - Хоҙайға хеҙмәт итер өсөн, икенсеһе - лайыҡлы тормош нигеҙҙәрен тәьмин итер, хәләл ризыҡ менән туҡланыр өсөн, ә өсөнсө өлөшө уйланыр, фекер йөртөр өсөн.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ҠОЯШҠА...

## йышыраҡ күрен

■ Йыш баш ауыртыуының сәбәбе ҡояш яҡтылығы, тимәк D, B витаминдары һәм коэнзим Q10 етешмәүҙән булыуы ихтимал. Ҡояшта йөрөү мөмкинлеге һирәк эләгә икән, был витаминдарҙы ризыҡтар ярҙамында тулыландырырға мөмкин, ти ғалимдар. D витамины балыҡ һәм йомортҡала бар. B витамины - рибофлавин дөгөлә, йомортҡала һәм һөттә бар, рибофлавин нервы системаһының эшенә, күреү һәләтенә, метаболизм процестарына ыңғай йоғонто яһай. Коэнзим Q10 бауырҙа була һәм ул шәкәрҙәрҙе энергияға әүерелдерә. Лаборатор тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, хроник баш ауыртыуы менән яфаланыусыларҙа тап ошо матдәләрҙең норманан түбән булыуы асыҡланған.

■ Эмоциональ кисерештәр кешенең психикаһына ғына түгел, ә физик сәләмәтлегенә лә йоғонто яһай. Аныҡраҡ әйткәндә, улар бөйөргә таш ултырыуға булышлыҡ итә. Нью-Джерси штаты ғалимдары билдәләүенсә, һейҙек ташы ауырыуы менән ауырыған сирлеләр һау бөйөрлөләргә ҡарағанда көнкүреш конфликттарына, эштәге күңелһеҙлектәргә, аҡса етмәүгә өс тапҡырға йышыраҡ зарлана икән. Әйткәндәй, быға тиклем ни өсөн бөйөрҙәрҙә таш барлыҡҡа килеүен фән аңлата алмай ине. Шуға ла был асыш ауырыуҙы артабан өйрәнергә ярҙам итәсәк. Статистика буйынса, халыҡтың 10 процентының бөйөрҙәрендә таш бар. Ир-егеттәрҙә был сир йышыраҡ осрай.

■ Рединг университеты ғалимдары билдәләүенсә, ҡара көртмәле мейе әүҙемлеге сығанағы булып тора. Ҡара көртмәләлә күҙәнәклек күп, шул уҡ ваҡытта шәкәр аҙ. Имтихандар алдынан көртмәле ашарға кәрәк. Һынауҙарҙа балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәре ҡатнашҡан. Улар компьютер экранындағы уҡты күҙәткән һәм уның йүнәлешен күрһәткән клавишаларға баҫырға тейеш булған. Был мәсьәлә алдынан көртмәле һутын эскән балалар был күнегеүҙе башҡаларға ҡарағанда 10 процентҡа уңышлыраҡ башҡарған. Быға тиклем дә ғалимдар ҡара көртмәләнең антиоксидант тәьҫирен асыҡлағайны инде. Ул организмдағы шешеү процестарын да туҡтатыу сифатына эйә. Ҡара көртмәләлә флаваноидтар күп.

■ Ҡояш нурҙары тәьҫире һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән D витамины сәләмәтлек өсөн мөһим. Швеция ғалимдары билдәләүенсә, ҡояшта йөрөү ҡояштан ҡасып бүлмәлә ултырыуға ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ. Каролинск институты белгестәре 20 йыл дауамында үткәргән тикшеренеүҙәренә таянып, түбәндәге һығымтаға килгән. Ҡояшта булырға яратмаусылар араһында үлем күрһәткесе ике тапҡырға юғары булып сыҡҡан. Ғалимдар аңлатыуынса, D витамины дефициты сәләмәтлеккә насар йоғонто яһай.

■ Бергамотлы сәй йөрәк һәм ҡан тамырҙары эшмәкәрлегенә ыңғай йоғонто яһай. Ғалимдар билдәләүенсә, ул холестерин кимәлен түбәнәйтә. Бергамоттың составындағы энзимдар йөрәк ауырыуҙарына килтерә торған аҡһымдарҙы юҡҡа сығара. Гидроксиметилглутарил атамаһы аҫтында билдәле булған был энзимдар "насар" холестеринға ҡаршы көрәшә, етмәһә, уларҙың кире эффекты ла юҡ. Билдәле булыуынса, көнөнә 5 сынаяҡ ҡара сәй эсеү яман шеш үҫешен әкренәйтә. Быға сәйҙәге флавоноидтар булышлыҡ итә.

КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП...

# УҠЫУСЫ ӘҘЕР БУЛМАЙЫНСА,

## уҡытыусы килмәй ул...



Император ғәли йәнәптәре, ауырып, ятаҡтан яҙа. Күпме тырышһалар ҙа, табиптар уны дауалай алмай. Ярты донъяны баҫып алған хаким ауырыу алдында көсһөҙ булып сыға. Асыуланған император уны аяҡҡа баҫтыра алмаған табиптарҙың башын киҫергә ҡуша. Яҡын тирәлә йүнле табип ҡалмай. Бер көн император вәзирен саҡыра ла:

- Тағы ла берәй табип ҡалдымы? - тип һорай.

- О, минең батшам, башҡаса ҡалманы. Һеҙ үҙегеҙ уларҙың башын киҫергә ҡуштығыҙ бит, - ти вәзир.

- Берәү ҙә ҡалманымы ни?

- Берҙән-бер дауалаусы ғына ҡалды. Ул бынан йыраҡ түгел ерҙә йәшәй.

- Ул дауалай беләме һуң?

- Әйе, белә. Ләкин ул шул тиклем тәрбиәһеҙ, мәҙәниһеҙ һәм тупаҫ кеше. Күптән түгел шул хәстрүш, императорҙы аяҡҡа баҫтыра алам, тип, хәбәр таратҡан.

- Һин ниңә миңә уның тураһында өндәшмәнең?

- О, минең батшам, әгәр ҙә уны алып килһәм, уның холҡо өсөн һеҙ минең дә башымды киҫәсәкһегеҙ. Ул шул тиклем тупаҫ, - ти вәзир.

- Алып кил миңә ул холоҡһоҙ дауалаусыңды! - тип бойора император.

Алып киләләр императорға тере тороп ҡалған берҙән-бер табипты.

- Һин, ысынлап та, мине аяҡҡа баҫтыра алаһыңмы? - тип һорай батша.

- Ат дағалағанда баҡа ботон ҡыҫтырғандай, ҡыҫылма минең эшемә. Батша булмағас, мин дәүләт менән идара итеүгә ҡыҫылмайым бит, һин ниңә белмәгән башың менән медицинаға ҡыҫылаһың? Батша булараҡ, бәлки, һин бөйөкһөңдөр, ә медицинала һин ябай итексенән ары түгелһең, - тип, бик тупаҫ яуап бирә дауалаусы.

- Хәҙер үк башын киҫегеҙ! - тип аҡыра хаким.

Быға тиклем әле бер кем дә батша менән улай һөйләшмәгән була. Һаҡсылар шундуҡ тупаҫ табиптың ҡулдарын шаҡарып, теҙләндереп тә ҡуя.

- Һинең ихтыярыңда, - ти дауалаусы. - Мин һинең һуңғы ышанысың, башҡа берәү ҙә һине аяҡҡа баҫтыра алмаясаҡ.

- Ярай, улайһа, әйҙә, дауалай башла. Һин бит мине бер көндә аяҡҡа баҫтырасаҡмын, тип хәбәр таратҡанһың.

- Минең өс шартым бар. Шуларҙы үтәһәң генә, мин һине дауалай башлармын.

- Әйт!

- Бер тоҡ алтынға ҡушып, иң шәп атыңды бир.

- Әгәр ҙә аяҡҡа баҫтырһаң, мин һиңә алтын тейәлгән бер өйөр ат бирәм.

- Һуңынан бирерһең. Икенсе шартым: беҙ икәүҙән-икәү генә ҡалырға тейеш.

- Ниңә?

- Дауалаған мәлдә, бәлки, һиңә ауыртыуҙан ҡысҡырырға тура килер. Һинең көсһөҙ икәнеңде башҡалар ишетмәһен.

- Мин риза. Өсөнсө шартың ниндәй?

- Һин аяҡҡа баҫҡансы ярандарың һинең бер ниндәй бойороғоңдо ла үтәмәһен.

- Аңлат.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ВАҠЫТ ҠӘҘЕРЕН БЕЛЕҮ -

## шулай уҡ иңгә һалынған бурыс



**Ғүмер кешегә Аллаһы Тәғәлә тарафынан билдәле бер ваҡытҡа ғына бирелгән иң ҡиммәтле капитал. Ҡөрьәндең күп аяттарының мәғәнәһе кешеләргә, үҙ ваҡытын аҡыл менән файҙаланыуынан, файҙалы эштәр менән шөғөлләнеү-шөғөлләнмәүенән сығып, "килем ала" йә "зыян күрә" икәне тураһында иҫкәртеү ул.**

Мосолман үҙ ваҡытын Ислам ҡушҡан тәртипкә һала. Көн эсендә ул биш тапҡыр намаҙ уҡый. Көндәре лә, төндәре лә доғалар уҡыуға арнала. Бәйғәмбәребеҙ тормошо үҙе үк мосолманға эшен һәм ял ваҡытын ойоштороу өлгөһө ул. Ул аҙналыҡ эше тураһында көнләп һәм сәғәтләп план төҙөгән, айырым көндәргә айырым эштәр тәғәйенләп ҡуйған. Ә килеп тыуған проблемаларҙы мөмкинлеккә ҡарап башҡарған. Һәр бер эште үтәү өсөн уның айырым ваҡыты һәм срогы булған.

Ваҡытты дөрөҫ һәм файҙалы итеп бүлеү - ул үҙе бер сәнғәт, тормошта уңыш яулауҙың бер шарты. Ошо талантҡа эйә булыу Исламда хуплана. Бәйғәмбәребеҙ: "Кеше ике нәмәне ваҡытында баһалай белмәй - ул һаулыҡ һәм буш ваҡыт",- тигән.

Көндәлек тормошта ваҡыт шулай бүленергә тейеш: бер өлөшө - Хоҙайға хеҙмәт итер өсөн, икенсеһе - лайыҡлы тормош нигеҙҙәрен тәьмин итер, хәләл ризыҡ менән туҡланыр өсөн, ә өсөнсө өлөшө уйланыр, фекер йөртөр өсөн.

Ауыр хеҙмәт көнөнән һуң кеше ял итергә, физик һәм рухи көсөн тергеҙергә теләй. Ял итеү - ул хәл алыу, юлды артабан дауам итеү, тормошоңдо яңынан күҙҙән үткәреү, анализлау өсөн ниндәйҙер бер туҡталыш һымаҡ. Ял ваҡыты эш ваҡыты һымаҡ уҡ мөһим, шуға ла сифатлы ял өсөн бөтөн шарттар тыуҙырырға кәрәк. Ҡыҙғаныҫҡа күрә, күптәр ял итеүҙе күнел асыуға тиңләй, ләкин улар икеһе ике нәмә. Буш ваҡыт шөғөлһөҙ ултырып, йоҡләмәләрендән, намыҫтан, оятһан азат булыу, тигәнде аңлатмай.

Иң яҡшы ял - ул шөғөлдәрҙе алыштырып тороу. Ауыр шөғөл еңеле менән алыштырыла. Ял мәлендә сәләмәт йоҡо ла кәңәш ителә. Изге Ҡөрьәндә, кеше өсөн иң файҙалы ял - ул йоҡо, тиелә. Ислам шулай уҡ спорт менән шөғөлләнеүҙе лә хуплай.

Аҡыл эйәләре: "Үткән ваҡыт - юғалған ваҡыт, киләсәк - билдәһеҙ, шулай булғас, беҙгә хәҙерге заман ҡала, һәм уны лайыҡлы йәшәп үткәрергә кәрәк", - ти.

**✓ Беҙ ҙә үҙебеҙҙе үҙебеҙҙең ялҡаулыҡ төрмәһенә бикләйбеҙ ҙә, кемдер килеп асҡанын көтөп ултырабыҙ. Аңланығыҙмы? Улайһа, үҙ ҡабырсағығыҙҙан сығығыҙ ҙа, уҡығыҙ. Ошо мин әле генә телгә алған китапты ла, "Киске Өфө"нө лә.**



- Улар минә ҡамасаулаһа, һине тулыһынса дауалай алмаҫмын.

Император табиптың өс шартына ла риза була һәм батша һарайында улар икәүҙән-икәү генә ҡала.

- Әйҙә, тиҙерәк дауалай башла, - ти тынысһыҙ хаким.

- Һинә, ҡарт ишәккә, мин һине аяҡҡа баҫтыра ала, тип кем әйтте? Минең ҡармаҡҡа эләккәнеңде һиҙмәйһеңме ни? Һин - ҡан эскестең битенә төкөрөү өсөн күпме көттөм мин ошондай уңайлы мәлде, - тип, дауалаусы батшаның битенә төкөрә.

Алйот хәлендә ҡалыуын аңлаған император асыуынан ап-аҡ була, бындай оятһыҙ ҡыланыуға нисек тә булһа ҡаршы тороу тураһында баш вата.

- Һаҡсылар, тиҙ булығыҙ минең янға, тотоғоҙ кәбәхәтте! - тип ҡысҡыра ул.

Һаҡсылар уның ҡысҡырыуын ишетһә лә, батшаның бойороғон боҙоуҙан ҡурҡып, урындарынан ҡуҙғалмай.

- Ах, һин, үләкһә, ҡысҡырырға хәлеңдән киләме әле! - тип, табип йән асыуына батшаның айғына тибә.

Император аяғы ауыртыуҙан ҡысҡырып ебәрә хатта.

- Хуш бул, һаҫып бөткән хайуан, - ти ҙә, табип батша бүләк иткән атҡа ултырып, йәне теләгән яҡҡа сабып сығып китә.

- Сабып үлтерәм, киҫәктәргә турайым! - тип үкерә император һәм, мамыҡ кеүек аяҡтарына көс-хәл менән баҫып, тышҡа сыға.

Дауалаусының хәйләһенә ышаныуына ныҡ асыуы килә уның, ләкин табип күптән инде әллә ҡайҙа олаҡҡан. Көс-хәл менән бәйлә торған бер атты тотоп, император дауалаусыны ҡыуа төшә. Шул саҡ ул үҙендә яңы көс уяныуын тоя. Сабып килә торғас, инде егерме йыл буйы һыбай йөрөмәүе, елдәргә ҡаршы сапмауы иҫенә төшә. Шул саҡ артынан яҡынлашып килеүсе таныш тауышты ишетеп ҡала. Был бөйөк императорҙың гәскәре уның артынан килә икән. Улар килеп етеүгә, батша туҙанға болғанып, һыны ҡатып көлә-көлә, ерҙә аунай икән: "Ах, һин, эт балаһы! Кемде аяҡҡа баҫтырғаныңды беләһеңме? Алтын тейәлгән бер карауан һинә!"

Ошо кинәйәле хикәйә менән башланып китә Мирзакәрим Норбековтың "Опыт дурака, или ключ к прозрению: как избавиться от очков" тигән китабы. Ташҡа баҫылғанға тиҙ ышанып бараммылыр, белмәйем, әммә үзбәк авторының китабы нык тәьҫир итте: әллә күпме китап уҡып та, был китаптағы кеүек ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәргә осраған юҡ ине әле. Күп нәмәгә күҙем асылды, элек белеп онотҡанымды яңынан иҫкә төшөргән кеүек булдым. "Кешенә үҙе белмәгән нәмәгә өйрәтеп булмай, бары белеп онотҡанын яңынан иҫенә төшөрөргә кәрәк", тип, Галилей бушҡа әйтеп ҡалдырмаған, күрәһең. Уйлап ҡарағыҙ әле, ысынлап та, шулай бит: ҡайһы бер китап ауыр уҡыла, ә ҡайһы берен уҡыған саҡта, ысынлап та, онотҡан нәмәләр яңынан иҫкә төшкән кеүек тойғо ҡала.

Эсеүҙе, тәмәке тартыуҙы ташлағандан һуң артабан камиллашыуға Норбековтың китаптары этәргес көс бирҙе минә. Боронғо көнсығыш фәйләсүфтәренең аҡылына таянып, суфыйҙар ғилемен иҫкә төшөрөп, аңлайышлы ябай тел менән, бер аҙ юмор өҫтәп яҙылған был китаптар, ысынлап, рухи көс бирә. Тәү ҡарамаҡҡа, Норбековтың беренсе китабы күреү һәләте насар булғандарға тәғәйенләнгән һымаҡ. Әммә, ентекләп уҡыһаң, автор әйткән кәңәштәрҙе тоттһаң, китапта бирелгән күнекмәләрҙе үтәһәң, ул киң ҡатлам уҡыусылар өсөн дә ҡулай. Шулай уйлап, Норбековтың китаптарын башҡаларға ла тәҡдим итә башланым. Бәҡтиһәң, ҡайһы берәүҙәргә уның яҙғандары бөтөнләй тәьҫир итмәй икән. Күптәр ялҡаулыҡтары арҡаһында, йә булмаһа, тормош мәшәҡәттәренән арынырға ваҡыт тапмай, ул китаптарҙы тәки уҡымаған. Китап авторы үҙе лә хроник ауырыуҙарынан тыш, ялҡаулыҡ тигән йоғошло ауыруы менән ауырыған булған. Шуға күрә ул башынан үткәндәрҙе йәшермәй, шәхси тәжрибәһенә таянып яҙа ла инде. Китаптың ылыҡтырғыс көсө, бәлки, ана шул ихласлыҡта һәм авторҙың үҙ кисерештәрен йәшермәй, нисек бар, шул килеш яҙыуындалыр ҙа.

"Уҡыусы әҙер булмайынса, уҡытыусы килмәй", тиҙәр. Һеҙ әҙерме яңы уҡытыусыны тыңларға? Әҙер булһағыҙ, уҡығыҙ, киреһенсә булһа - файҙаһы булмаясаҡ. Норбеков үҙе Сәйет Мөхәммәт Хәсән исемле кешенең өгөт-нәсихәттәрен тыңлаған. Мирзакәрим тәүге тапҡыр килгәнендә буласаҡ уҡытыусыһы уға: "Мин мәйеттәрҙе дауаламайым, бер аҙ күҙең асылғас килерһең", - тип ҡайтара. Һуңынан, тулыһынса йүнәлгәс кенә, аңлай Норбеков уҡытыусыһының һүҙҙәрен: һауыҡам, камиллашам тиһәң, иң тәүҙә үҙ көсөңә ышанырға кәрәк икән дә! Ә инде ялҡаулыҡҡа килгәндә, уның дауаһы ла һәр кемдең үҙендә түгелме ни? Был эпидемиянан арынмайынса, ғөмүмән, бер китапҡа ла йәбешергә ярамайҙыр ул - "батып барыусыны батып барыусы үҙе генә ҡотҡара", тиҙәрме әле? Норбековтың уҡыусылары Өфөгә йыш килеп тора. Тик үҙен күрергә ине, тигән хыялым һаман тормошҡа ашмай. Мәскәүҙән килгән бер уҡыусыһының лекцияһын тыңларға тура килгәйне. Шунда ул һөйләгән кинәйәле хикәйә һаман да иҫемдән сыҡмай: "Бер бәндәне 25 йылға төрмәгә ябалар. Яңғыҙ кешелек камерала аҡылдан шашмаҫ өсөн был меҫкен һәр бер көнөн билдәләп, сығыуына күпме ваҡыт ҡалғанын һанап, өмөтләнеп йәшәй. 25 йыл буйына ул аҙыҡ ташыусы төрмә һаҡсыһынан башҡа бер кемде лә күрмәй. Ниһайәт, сығырға ваҡыт етә. Тотҡон төрмә стенаһына һуңғы көнөн билдәләгән тамғаһын ҡуя ла, надзирателде көтә башлай. Көн кискә ауыша, ә ишек асырға тейеш кеше һаман юҡ та юҡ. Тотҡон йән асыуына ишекте дөмбөрләтә башлай. Коридорҙа аяҡ тауышы ишетелә. Ҡарауылсы ишекте аса. "Сыҡ, нимә ҡарап ултыраһың. 25 йыл буйына ишектәр асыҡ булды, ә һин бер тапҡыр ҙа ишекте асырға маташып, уны этеп тә ҡараманың", - ти ул".

Бына шулай, йәмәғәт, беҙ ҙә үҙебеҙҙе үҙебеҙҙең ялҡаулыҡ төрмәһенә биклә йбеҙ ҙә, кемдер килеп асҡанын көтөп ултырабыҙ. Аңланығыҙмы? Улайһа, үҙ ҡабырсағығыҙҙан сығығыҙ ҙа, уҡығыҙ. Ошо мин әле генә телгә алған китапты ла, башҡаларын да. "Киске Өфө"нө лә энәһенән ебенә тиклеп күҙҙән үткәреп уҡырға өйрәнегеҙ. Китаптарҙы ла, гәзитте лә уҡып та аңламаһағыҙ, тимәк, һеҙ башҡа уҡытыусыны көтәһегеҙ...

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

### Яратыу һәм ҡурҡыу

Хелен Шакман "Мөғжизәләр курсы" китабында аңыбыҙҙың ни бары ике генә нигеҙ торошо бар - яратыу һәм ҡурҡыу, ти. Ҡурҡыу барлыҡ кире хис-тойғоларҙың сығанағы булып тора. Концепция бик ябай һәм уны тойғоларыбыҙҙы тәрәнерәк өйрәнеү өсөн башланғыс нөктә сифатында файҙаланырға мөмкин. "Мин асыуланам икән, бары тик асыуланам, был бер ниндәй ҙә ҡурҡыу түгел!" - тиерһегеҙ. Ләкин ярһыу - ҡурҡыуҙың бер сағылышы. Тулҡынланыу - ҡурҡыуҙың тағы бер формаһы. Көнләшеү - шул уҡ ҡурҡыу. Башҡаларҙан үҙеңде нимәләлер кәм тойһаң, уларҙың бының менән килешеүенән ҡурҡаһың. Тимәк, беҙ ҡурҡыуҙан көнләшәбеҙ.

Ярһыу, көнләшеү, ҡыҙғаныу, тулҡынланыу, депрессия артында һәр саҡ ҡурҡыу ята. Ә "тормош - йә яратыу, йә ҡурҡыу" концепцияһының файҙаһы нимәлә? Ул беҙгә үҙ-үҙебеҙ менән гүзәл булырға һәм бик йыш ни өсөн уйлағаныбыҙға асыуланмауыбыҙҙы һәм ярһымауыбыҙҙы танырға өйрәтә.

Ҡурҡыуҙан азат булыу өсөн тәүҙә уның үҙегеҙҙә булыуын танырға кәрәк. Тимәк, тормош иптәшеңдә һине көнләшергә мәжбүр итеүеңдә һәм һинә төкөрөп ҡарауында гәйепләүҙән генә тормошоңда бер нәмә лә үҙгәрмәйәсәк. "Ул матур ҡыҙҙар менән һөйләшкәндә, ни өсөн мин ҡыҙғанам?" - тигән һорауҙы үҙегеҙгә биреп кенә мәсьәләне хәл итергә була. Был осраҡта башҡаларҙың етешһеҙлеген табырға тырышыу ҡурҡыуығыҙҙы таныуығыҙ менән алышына, ә инде ҡурҡыуығыҙҙы танығас, уны аша атлап үтеү мөмкинлегенә эйә булаһың.

Борсолоуығыҙҙың төп сәбәптәрен асыҡлағас, ҡылығығыҙҙы аңлатыуы ла еңел буласаҡ. Үҙебеҙҙең ҡурҡыуыбыҙҙы танып, беҙ гәйепте тирә-яҡтағыларға япһарыуҙан туҡтайбыҙ. Ғәмәлдә: "Мин һинең ҡурҡыуым тураһында белеүеңде теләйем. Әммә бында һин гәйепле түгел", - тибеҙ.

Артабан хис-тойғоларыбыҙҙы яратыу һәм ҡурҡыу терминдары аша аңлата башлаһаҡ, яҡындарыбыҙ ҙа асылыр. Үҙеңдең йомшаҡлыҡтарыңды таныу кемдер гәйепләүгә ҡарағанда файҙалыраҡ. Бынан тыш, беҙҙе урап алыусылар ҙа шул уҡ принцип буйынса йәшәүен онотмайыҡ. Йәғни беҙгә һөжүм итеп, улар үҙҙәренең ҡурҡыуын күрһәтә. Ә инде уларҙың нимәләндер ҡурҡыуын белһәң, үҙең әҙерәк ҡурҡаһың.

"Әгәр тормошобоҙҙа ике мөһим хис-тойғо - яратыу һәм ҡурҡыу ғына бар икән, күпселек даими ҡурҡып йәшәй", - тиерһегеҙ. Тап шулай! Кешеләрҙең күпселеге мөмкин булмағанса хәүефләнә. Берәүҙәр тирә-яҡтағыларға көлкөлө булып күренеүҙән йәки һимереүҙән, икенселәр үҙ йөҙөн, эшен йәки аҡсаһын юғалтыуҙан, бәғзеләр бурҙарҙан, ҡартлыҡтан, яңғыҙлыҡтан, тормоштан, үлемдән ҡурҡа. Шуға күрә улар үҙҙәрен аҡылдан яҙған кеүек тота. Ә яфаланыуҙарҙы нисек еңеләйтергә мөмкин? Бары тик яратыу, мөхәббәт аша.

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**

Йәштәргә вәғәз һөйләгәндә бер ғалим: "Был донъя үҙгәреп тора. Уның менән бәйләмәгеҙ үҙегеҙҙе. Әммә уның ҡиммәте тап ошонда ла инде", - ти. Йәштәр: "Үҙегеҙ, был донъя үҙгәреп тора, тиһегеҙ, үҙегеҙ ошонда ла инде уның ҡиммәте, тиһегеҙ. Быны нисек аңларға?"- тип һораған. Яуап урынына ошо һүҙҙәр яңғыраған: "Был донъялағы тормош өс-биш көн йәшәгәнгә тиң. Ошо сәбәпле ул үҙгәреп тороусан. Ә бына киләсәк тормоштоң уңайлыҡтары үҙгәрешһеҙ һәм мәңгелек. Әммә был сикһеҙ ожмах уңайлыҡтары беҙҙең был донъялағы ҡылыҡтарыбыҙ менән бәйләнгән. Ошо сәбәпле, был донъяның ҡиммәте ҙур һәм кеше тормошо уның өсөн ҙур капитал һалыуҙарға тиң. Шуның өсөн, ерҙә матур ҡылыҡтар ҡылһағыҙ, киләсәктә мәңгелек бәхеткә өлгәшерһегеҙ. Ә инде яуызлыҡ ҡылһағыҙ, был сикһеҙ ғазаптарға килтерер".

Бер саҡ бер дин әһеленә шундай һорау биргәндәр: "Кем һуң ул намыҫлы мосолман?" "Намыҫлы мосолман был тормоштоң ҡиммәтен белә һәм уны кәрәкмәгән нәмәләргә тотонмай, - тигән дин әһеле. - Ваҡыттың ҡәҙерен белә. Диндә тәрән өйрәнә һәм үҙе белгәндәргә таянып эш итә. Ул ялғанламай һәм ғәйбәт һатмай. Мосолман туғанының етешһеҙлектәрен йәшерә һәм уның хаталарын ғәфү итә. Бар кешене лә йәлләй. Сит кешеләр ғүмеренә, мөлкәтенә ҡул һуҙмай һәм абруйына, намыҫына йоғонмай. Ул тик үҙе менән генә була". "Нисек инде, үҙе менән генә була?" - тигән һорау яңғыраған артабан. "Эйе, мосолман үҙенең хаталары һәм гонаһтары тураһында уйлап, Аллаһы Тәғәләнән ғәфү үтенә. Изге мосолман берәүгә лә йөк булырға теләмәй, башҡаларҙың ауырлығын күтәрешә. Ысын мосолман башҡа кешеләрҙең һүҙендә лә, ҡылыҡтарында ла етешһеҙлек шәйләмәй. Үҙенең һәм башҡаларҙың ваҡытын ҡәҙерләй".

*ЗАМАН МӘҠӘЛДӘРЕ*

# БЕЛҺӘҢ - АУЫҘЫҢДЫ ЯП!

- Мәғәнәле, аҡыллы фекер ишеткем килһә, һөйләй башлайым.
- Алдаш! Хәтереңде яҡшыртырһың!
- Ҡатынымды яратам, шуға ла аҙ хыянат итәм.
- Йәшәһен күрше әбейҙәре - белем шишмәләре!
- Халыҡ яҡшы тормошто теләй, ә уға күңелле тормош ойошторалар.
- Минә кешенеке кәрәкмәй - шуға ла һатам.
- Белмәйһең икән - шым ултыр, белһәң - ауыҙыңды яп!
- Үҙең тураһында насар һөйләмә - кешеләр эшен башҡарма!
- Зарланмағыҙ тормошҡа, бәлки, уға ла һеҙҙең менән һөйбәт түгелдер...
- Яҡынырәк белгән һайын йырағыраҡ ебәрге килә.
- Ижади кешенең ҡанаттарын ҡырҡыу - бәгерһеҙлек, ситлеккә ултыртыу мәрхәмәтлерәк...
- Күрше сират һәр саҡ тиҙерәк үтә!
- Таң да яҡынлаша бара, ә яҡынлыҡ һаман юҡ.
- Бөтәһе кеүек йәшәгә килә лә ул, тик намыҫ рөхсәт итмәй.
- Теләһәң - эшлә, теләмәһәң - мәжбүр итербеҙ!

**Фәнүр ШАҺИЕВ.**

✔ *Мостай Кәримдең "Өс таған" әҫәре буйынса төшөрөләсәк нәфис фильм өсөн актер-малайҙар эҙләйҙәр. Төп шарт - башҡорт телендә яҡшы һөйләшеү. Кандидат 11-12 йәштәрҙәге ауыл малайын уйнарға тейеш буласаҡ.*



СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

## БЕҘ БЫҒА ЛАЙЫҠ!



**Башҡортостан Хөкүмәте 2020 йылда республикала VI Бөтә донъя фольклориадаһына әҙерләнеү һәм уны уҙғарыу буйынса саралар планын раҫланы.**

Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, гәйәт ҙур фольклор байрамына әҙерлек сиктәрендә бер төркөм саралар үтә: төрки йәштәренең "Урал моңо" халыҡ-ара музыкаль ижад конкурс-фестивале, Бөтә Рәсәй сәсәндәр фестивале, "Евразия йөрәге" халыҡ-ара сәнғәттәр фестивале. Шулай уҡ 2019 йылда "Урал батыр" этноүҙәген булдырыу күҙаллана. Ағымдағы йылдың сентябрендә Өфөлә Бөтә донъя конгресы (CIOFF) үтә. Документҡа ярашлы, 2018 йылдың тәүге яртыһында фольклориаданың логотибын һәм бренд китабын әҙерләү, шулай уҡ сара сайтын эшләтеп ебәреү күҙаллана. Рус һәм башҡорт телдәрендә "Башҡортостан халыҡтары фольклоры" энциклопедияһы нәшер ителәсәк.

Бөтә донъя фольклориадаһы Халыҡ-ара фольклор фестивалдәр һәм традицион сәнғәт ойошмалары советының (CIOFF) бер өлөшө булып тора. Унда гәҙәттәгесә 60-80 илдән өс мең самаһы артист ҡатнаша. Тәүге Фольклориада 1996 йылда - Голландияла, икенсеһе 2000 йылда Японияла уҙҙы. Венгрия өсөнсө Фольклориаданы үткәреү урыны булды. 2012 йылда Көньяҡ Кореяла дүртенсе Бөтә донъя фольклориадаһы уҙҙы. 2016 йылда Бөтә донъя фольклориадаһы Мексикала гөрләне. 2015 йылдың октябрендә 45-се Бөтә донъя конгресында һәм Халыҡ-ара фольклор фестивалдәр һәм традицион сәнғәт ойошмалары советының генераль ассамблеяһында 2020 йылда Фольклориаданы Башҡортостан Республикаһында уҙғарыу тураһында иғлан ителде.

## ҠУРАЙСЫЛАР - ҠЫЙҒЫЛА



**30 мартта Ҡыйғы районында Ҡурайсыларҙың "Ҡыйғыр ҡурай" II асыҡ төбәк конкурсы үтә. Ижади бәйге республиканың төньяҡ-көнсығыш төбәгендә ҡурайҙы пропагандалау маҡсатында ойошторола.**

Ул бер турҙа түбәндәге номинацияларҙа үтәсәк: "Яңғыҙ башҡарыу" (бәләкәй төркөм - 7 йәштән 12 йәшкә тиклем, өлкән төркөм 16 йәшкә тиклем), "Инструменталь ансамбль" (Балалар музыка мәктәптәре, сәнғәт мәктәптәре). Баһалама ағзалары - З. Исмәғилев исемендәге Өфө сәнғәт институтының фольклор кабинеты етәксеһе Фәйез Шәрипов, сәнғәт училищеһы уҡытыусыһы Айрат Ҡарасов, Благовещен ҡалаһының балалар сәнғәт мәктәбе уҡытыусыһы Айнур Назаров, Башҡортостандың халыҡ артисы Айытбай Фәйзуллин. Сара Үрге Ҡыйғы район мәҙәниәт йортонда 11.00 сәғәттә башлана.

## "ЕВРАЗИЯ ЙӨРӘГЕ"




**"Евразия йөрәге" Халыҡ-ара сәнғәт фестиваленең программаһы билдәле булды. Фестиваль 8-12 июндә, Өфө амфитеатрында үтә. БР Мәҙәниәт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, быйыл да бик бай программа тәҡдим ителәсәк.**

Сараны 8 июндә БР Милли симфоник оркестры "Симфоник тән" менән аса. 9 июндә фестивалдә "Этно тән" дауам итә. Ошо уҡ көндө Башҡортостан халыҡтарының милли кейеме республика байрамы үтәсәк. Быйыл байрамда республикала йәшәүсе яҡынса 100 милләт вәкиле ҡатнашыуы мөмкин. Улар барыһы ла баш ҡала урамы буйлап милли кейем парадында үтәсәк. 10 июндә Йәштәр симфоник оркестры үҙенең "Симфоник тән"ән тәҡдим итәсәк. 11 июндә ҡурай фестиваль кисенең төп геройы буласаҡ. "UfaKuraiFest" проектында билдәле ҡурайсылар сығыш яһай. 12 июнь традицион рәүештә ҙур Гала-концерт үтә. III "Евразия йөрәге" Халыҡ-ара сәнғәт фестивале лә Республика Башлығы грантына ойошторола.

## ГЕРОЙҘАР ЭҘЛӘЙБЕҘ



**Мостай Кәримдең "Өс таған" әҫәре буйынса төшөрөләсәк нәфис фильм өсөн актер-малайҙар эҙләйҙәр. Төп шарт - башҡорт телендә яҡшы һөйләшеү.**

Кандидат 11-12 йәштәрҙәге ауыл малайын уйнарға тейеш буласаҡ. Үҙен һынап ҡарарға теләүселәр "Кастинг" тип яҙып, фотоларын һәм мәғлүмәттәрен taganokfilm@mail.ru электрон почтаһына ебәрергә тейеш. Картинаның режиссеры - Айнур Асҡаров, ул "Өфөнән һөйөү менән", "Енмеш", "Пилорама", "Әсе бал", "Әсә", "Мы не рабы" тигән фильмдары менән билдәле. Фильм быйыл йәй төшөрөләсәк. Тулы метрлы фильм Мостай Кәримдең юбилейына арналасаҡ.

## РЕЖИССЕРҘАР ӨСӨН...



**18 йәше тулған һәм кино төшөрөү өлкәһендә тәжрибәһе булған режиссерҙар, профилле вуздар студенттары Disney үткәргән "Режиссерҙар конкурсы"нда ҡатнаша ала. Ғаризалар 9 апрелгә тиклем ҡабул ителә.**

Ҡатнашыусылар тәҡдим ителгән 7 сценарий араһынан берәүһен һайлап алып, уның өсөн үҙенең режиссер экспликацияһын эшләй. Унда проектты нисек күреүен: локациялар, кастинг, музыка һәм башҡа деталдәр тураһында ентекләп яҙырға кәрәк буласаҡ. Иң сағыу эштәр авторҙары билдәле Рәсәй режиссерҙары Федор Бондарчук, Владимир Хотиненко, Джаника Файзиеванан торған эксперт советы алдында үҙенең проектын яҡлаясаҡ. Жюриҙы Disney-ҙың Рәсәйҙәге режиссеры һәм креатив продюсеры Владимир Грамматиков етәкләй. Еңеүселәр "Бәхет - ул..." тип аталған киноальманах төшөрөүҙә ҡатнаша аласаҡ.

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

## ТАШҠЫН КИЛӘ...

Гидрометеорология һәм тирә-яҡ мөхит мониторингы буйынса Башҡортостан идаралығы хәбәр итеүенсә, Ағиҙел бассейнында, Ҡариҙел йылғаһын да индереп, ҡар ҡатламындағы һыу запасы норманан 49 процентҡа кәм. Ҡар ҡатламы бейеклеге норманан 40 процентҡа әҙерәк булып, 35 сантиметр тәшкил итә.

Ҡарҙың быңдай күләмендә Ағиҙел һәм Ҡариҙел йылғалары 4-5 метрға тиклем ташыуы мөмкин. Был осраҡта торлаҡ йорттарҙы һыу баҫмаясаҡ. Ағиҙел 520 сантиметрға тиклем күтәрелгәндә Дим районының Романовка ауылы менән Ленин районындағы Козарез автомобиль юлын баҫасаҡ.

Яҙғы ташҡынды тыныс үткәреп ебәреү маҡсатында ҡала территорияһында төрлө саралар тормошҡа ашырыла. 12 марттан ҡаланың, ҡала районларының һәм ойошмаларының ташҡынға ҡаршы комиссиялары эш башлаған. Бөгөнгә 28 ташҡынға ҡаршы штаб, 12 күҙәтеү посы ойошторолған. Өфөнөң 60 кешенән, 12 техника берәмегенән, 22 йөҙөү сараһынан тупланған Эҙләү-ҡотҡарыу отряды һәр саҡ әҙерлек һыҙатында тора.

Ташҡынға әҙерлек ҡаланың йәшәүен тәьмин иткән барлыҡ хеҙмәттәр менән бергә алып барыла. Мәҫәлән, "Уфаводоканал" предприятиеһы һыу алыу һәм таҙартыу ҡоролмалары, эсәр һыуҙы таҙартыу системаларын әҙерләү, һыу алыу колонкаларының, селтәрҙәрҙең, узел камераларының, ҡоҙоҡтарҙың техник торошон тикшереү эштәрен башлаған. СУРСИС предприятиеһы Ағиҙел, Ҡариҙел, Дим йылғалары күперҙәренең терәүҙәре эргәһендәге боҙҙо бысыуҙы планлаштырған.

Һыу баҫыу хәүефе килеп тыуғанда халыҡты иҫкәртеү барлыҡ ысулдарҙы, шул иҫәптән 104 сирена, автомобилдәрҙәге көсәйтеү ҡорамалдары аша тормошҡа ашырыласаҡ. Шулай уҡ йорттар буйлап йөрөп сығыу ҙа ойоштороласаҡ.

Әлеге ваҡытта яҙғы ташҡын буйынса былтыр эшләнгән интерактив карта яңыртылған. Уға көн һайын иртәнге 8-гә һәм киске сәғәт 6-ға ҡарата хәл-торошто иҫәпкә алып, үҙгәрештәр индереләсәк.

БР Дәүләт комитеты менән берлектә Шаҡша бисҭәһендәге Ҡариҙел йылғаһы күперендә һәм Дим йылғаһы буйындағы "Алтын балыҡ" туҡталышында өҫтәмә автоматлаштырылған мәғлүмәт тапшырыу ҡорамалдары ҡуйылған. Интернет селтәрен ҡулланыусы теләгән бер кеше "Өфө ҡалаһының граждандарҙы яҡлау" МБУ-һының интернет-сайты аша уларҙағы мәғлүмәт менән таныша ала.

Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов хатта ҡар ҡатламында һыу запасы аҙ булған осраҡта ла ташҡынға максималь кимәлдә әҙерләнергә кәрәклекте билдәләп, шулай уҡ баҡсаларҙы айырым күҙәтеүгә алырға саҡырҙы. Сөнки бөгөн коллектив баҡсаларҙа теркәлеүселәр һаны йылдан-йыл арта һәм улар унда йыл әйләнәһенә йәшәй. Ә әлеге ваҡытта ташҡын зонаһына эләккән шәхси сектор буйынса тулы мәғлүмәт булһа, коллектив баҡсаларҙа хәл-торош үҙгәреп тора.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Март - Апрель (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 26 (8) дүшәмбе | 5:36 | 7:06 | 13:30 | 18:09 | 19:39 | 21:09 |
| 27 (9) шишәмбе | 5:33 | 7:03 | 13:30 | 18:11 | 19:41 | 21:11 |
| 28 (10) шаршамбы | 5:31 | 7:01 | 13:30 | 18:13 | 19:43 | 21:13 |
| 29 (11) кесе йома | 5:28 | 6:58 | 13:30 | 18:14 | 19:44 | 21:14 |
| 30 (12) йома | 5:26 | 6:56 | 13:30 | 18:16 | 19:46 | 21:16 |
| 31 (13) шәмбе | 5:23 | 6:53 | 13:30 | 18:18 | 19:48 | 21:18 |
| 1 (14) йәкшәмбе | 5:20 | 6:50 | 13:30 | 18:20 | 19:50 | 21:20 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*


ИҒЛАНДАР

Редакцияға тәжрибәле **водитель** һәм башҡорт телен яҡшы белгән **версткалаусы инженер** талап ителә. 253-25-44 телефоны буйынса мөрәжәғәт итергә.

* * *

Утерянный студенческий билет БГУ **№14332** на имя **Кунафина Загита Ражаповича**, считать недействительным.


СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**24 март "Һөйәһеңме, һөймәйһеңме?"** (Ф. Бүләков), трагикомедия 12+

**25 март "Диңгеҙ. Утрау. Хазина"** (Д. Сәлимйәнов), пираттар мажараһы. Башлана 12.00 0+

**25 март "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия 12+

**27 март "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович) 16+

**28 март "Маҡтымһылыу, Әбләй һәм ҡара юрға"** (Т. Ғарипова), мюзикл 12+

**29 март "Эҙләнем, бәгерем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**24, 25, 31 март "Почему весна красна?"** (В. Щербакова). Башлана 16.00 0+

**27, 28, 29, 30 март "Почему весна красна?"** (В. Щербакова). Башлана 12.00, 16.00 0+

**24 март "Волк и семеро козлят"** (А. Рахманкулова). Башлана 12.00, 14.00 0+

**25 март "Кот в сапогах"** (Н. Шувалов). Башлана 12.00, 14.00 0+

**29 март "Хроники путешествия Нильса"** (И. Әлмөхәмәтов). Башлана 18.00 6+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**24 март "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. Башлана 12.00 0+

**24 март "Йәнкиҫәккәйем"** (Т. Миңнуллин), музыкаль комедия 12+

**25 март "Как Колька двойку исправлял"**, әкиәт. Башлана 12.00 6+

**27 март "Нух кәмәһе"** (У. Хуб), ғаилә өсөн тамаша. Башлана 12.00 0+

**30 март "Аҡса булһа бер муҡса"** (М. Багаев), музыкаль комедия 12+

ӘҘӘБИӘТ, МӘҘӘНИӘТ...

# КИТАПХАНА ӨЛӨШӨ...

**Башҡортостан Милли китапханаһының республиканың 100 йыллығына әҙерләгән яңы дүрт альбом проекттары Башҡортостан Башлығының 9 миллион һум күләмендәге грантына лайыҡ булды.**

Беренсе альбом - башҡорттарҙың төп һәм иң мөһим эпик әҫәре - "Урал батыр" эпосы балалар өсөн рус теленә тәржемә ителәсәк. Тәржемәнең төп маҡсаты - рус телле уҡыусыға эпосты юғары шиғриәт булараҡ тәҡдим итеү. "Башҡортостанда театр: тарих һәм хәҙерге заман" тигән икенсе альбом Башҡортостанда театрҙың күренеш булараҡ барлыҡҡа килеүе, хәҙерге көндәргә саҡлы унының үҫеше хаҡында һөйләйәсәк. Ул Башҡортостан Республикаһының бөтә театрҙары, иң мөһим спектаклдәр, актерҙар һәм режиссерҙар тураһында очерктарҙы үҙ эсенә ала, залдарҙың физик характеристикаһы, инженер конструкциялары хаҡында мәғлүмәт бирә. Өсөнсөһө - "Башҡорт халыҡ бейеүе: тарих һәм хореография" альбомы. Унда тарихи очерктан тыш, башҡорт халыҡ бейеүҙәре хореографияһы һүрәтләнәсәк, сағыу халыҡ һәм профессиональ бейеү коллективтары тәҡдим ителәсәк. "Этник стиль: башҡорт образы" тигән дүртенсе альбомда заманса һәм киләсәк кейем хаҡында һүҙ бара. Заманса кейем-һалым дизайнерҙары эшенә тарихи костюм (төҙөлөшө һәм биҙәлеше) нисек тәьҫир итә, улар йолаларға таянып, ниндәй яңы һәм уңышлы нәмә тәҡдим итә ала - бында ошо һәм шуға бәйле һорауҙарға яуап биреләсәк. "Йәмәғәтселек Башҡортостан мәҙәниәте менән етерлек кимәлдә таныш түгел. Проектты тормошҡа ашырыу төрлө мәҙәниәттәргә һәм хатта цивилизацияларға ҡараған кешеләр араһында бер-береһен яҡшыраҡ аңларға, йәғни хәҙерге замандың иң мөһим мәсьәләләренең береһен хәл итергә булышлыҡ итәсәк", - тип хәбәр иттеләр Милли китапхананан. Һәр альбомдың яҡынса тиражы: 1000 дана (дөйөм тиражы 4000 дана). Альбомды әҙерләү өсөн тарихи, архив материалдар (очерк һәм фото) йыйыласаҡ, алдынғы белгестәр, тәржемәселәр йәлеп ителәсәк.

# ПОЭМА ЯҘ ҘА...



**Башҡортостан Республикаһы ойошторолоуҙың 100 йыллығына "Минең данлы Башҡортостаным!" поэмалар конкурсы иғлан ителде.**

Конкурс 2018 йылдың 1 февраленән 30 ноябренә ҡәҙәр башҡорт телендә шиғриәт (поэма) номинацияһы буйынса үтә. Конкурсҡа 18 йәше тулған, Рәсәй Федерацияһы биләмәһендә йәшәүсе һәм уның гражданы булған авторҙарҙан әҫәрҙәр ҡабул ителә. Еңеүселәрҙең һәм призерҙарҙың әҫәрҙәре "Ағиҙел" журналында баҫылып сығасаҡ. Конкурс һөҙөмтәһендә алты призлы урын билдәләнә. Номинацияла еңеүселәр 50 мең, 30 мең һәм 15 мең һум күләмендә аҡсалата премия һәм маҡтау дипломы менән бүләкләнә. Ҡулъяҙмалар һәм ҡатнашыуға ғариза электрон формала ҡабул ителә. Конкурс тураһында положение Яҙыусылар союзы сайтында баҫылған. Конкурсты ойоштороусылар - Башҡортостан Яҙыусылар союзы, республиканың Мәҙәниәт министрлығы, республиканың "Ағиҙел" ижтимағи-сәйәси һәм әҙәби-нәфис журналы. Конкурстың төп маҡсаты - һәләтле шағирҙарҙы асыҡлау, улар үҙҙәрен күрһәтә алһын өсөн шарттар булдырыу, республика халыҡтары тарихын һәм мәҙәниәтен популярлаштырыуға тос өлөш индерә алған шиғри әҫәрҙәр авторҙарын дәртләндереү, республика ойошторолған саҡта башҡорт халҡының яҙмышы хаҡында иң яҡшы әҫәрҙәр эҙләү, Башҡортостан тарихына ҡарата ҡыҙыҡһыныу, халыҡтарҙың рухи-әхлаҡи йолаларына хөрмәт һәм һаҡсыл ҡараш булдырыу.

ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы

**"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына килгән хаттарҙы барлауҙы дауам итәбеҙ. Һеҙ ҙә башҡорт әҙәбиәтендә һәр быуын кешеһенең иғтибарына лайыҡ әҫәрҙәрҙе/ китаптарҙы тәҡдим итеүҙән туҡтамағыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар!**

***99. Салауат Юлаев "Шиғырҙар, йырҙар, рәсми ҡағыҙҙар".*** Был китапта башҡорт халҡының милли геройы Салауат Юлаевтың шиғырҙары, йырҙары һәм 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында ул ҡул ҡуйған рәсми ҡағыҙҙары тупланған. Йыйынтыҡты төҙөүсе М.Х. Иҙелбаев "Баш һүҙ"ҙә Салауат Юлаевтың тормошо, ижады тураһында ла бик йөкмәткеле мәғлүмәт бирә. 1994 йылда ташҡа баҫылған 152 битлек был ҙур булмаған йыйынтыҡ Салауат Юлаевтың шәхесе, башҡорт халҡының ихтилалдарға күтәрелеүе тураһында үҫмерҙәргә мәғлүмәт биреү өсөн бик ҡулайлы. Салауаттың исемен телгә алырға ла тыйылған саҡта ла данлы улын хәтеренән юймаған башҡорт халҡының киләсәк быуындары ла уны онотмаһын өсөн ошо китапты һәр кем уҡырға, сәсән телле батырҙың ҡылған ғәмәлдәрен һәм шиғри юлдарға һалынған һүҙҙәрен күрергә тейеш.

***100. "Башҡорт халыҡ ижады" 18 томда.*** Бөгөн беҙ йәш быуынға рухи тәрбиә биреү, әҙәп-әхлаҡҡа өйрәтеү, башҡорт йолаларын, традицияларын, телен күңеленә һеңдереп, йөрәгендә милләте өсөн ғәм уятып үҫтереү ғаиләлә башлана, тибеҙ. Ә бит бала тәү сиратта әсәһенең туған телендәге моңло бишек йырҙарын, хикмәтле әкиәттәрен, атаһының үлсәп кенә әйтелгән аҡыллы һүҙен тыңлап үҫә. Бының өсөн башҡорт халҡының ауыҙ тел ижады үрнәктәрен белеү мотлаҡ, ә уны инде тап ошо ун һигеҙ томлыҡ ҡалын-ҡалын китаптарҙан табып уҡырға, балаларға һөйләргә була. Сөнки был ун һигеҙ йыйынтыҡ ғилми тикшеренеүҙәр өсөн генә түгел, үҙ халҡының рухи ҡиммәттәрен һанлаған һәр башҡорт өсөн файҙалы. Был томдарҙа йола фольклоры, легенда, риүәйәттәр, эпостар, тарихи ҡобайырҙар, хикәйәттәр, иртәктәр, ҡисса һәм дастандар, эпик ҡобайырҙар, йомаҡтар, мәҡәлдәр һәм әйтемдәр, төрлө әкиәттәр, йырҙар тупланған.

**"Башҡорт китабы топ-100+"** акцияһы, ниһайәт, маҡсат иткән моратына ирешә: беҙ һәр башҡорт кешеһе уҡырға тейешле йөҙ әҫәр һәм китапты билдәләп сыҡтыҡ. Бының өсөн гәзит уҡыусыларҙан килгән хаттарҙы ла барланыҡ, "Бәйләнештә" социаль селтәрендә яҙған тәҡдимдәрҙе лә күҙ уңынан ысҡындырманыҡ, үҙ ҡарамағыбыҙға уҡырға лайыҡлы тип тапҡан әҙәбиәтте лә тәҡдим иттек. Шулай итеп, **"Башҡорт китабы топ-100+"** акцияһына йомғаҡ яһарға ғына ҡалды. Тулы исемлекте "Киске Өфө" гәзитенең "Бәйләнештә" селтәрендәге махсус төркөмөндә ҡарау мөмкинлеге булыр, ә иң шәп аннотация яҙған уҡыусыбыҙҙы киләһе һанда билдәләрбеҙ. Әйткәндәй, акция тамамланһа ла, һәр быуын кешеһе өсөн уҡымлы булыр әҫәр йә тотош китап күҙ уңынан төшөп ҡалыуын күрһәгеҙ, тәҡдимдәр индереүҙе дауам итергә була.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БҮРЕК КЕЙГӘНДЕҢ...

## барыһы ла батыр түгел

Аҡыл эҙләгән аҡыл табыр, мал эҙләгән мал табыр, нәфсеһенә эйәргән малынан да, аҡылынан да яҙыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Әхлаҡты камиллаштырыуҙың сере шунда: һәр көнөңдө ғүмереңдең һуңғы көнө һымаҡ йәшә -тулҡынланма, ҡурҡма, ҡыланма.

**(Марк Аврелий).**

Дөрөҫөн әйткәндә, никах - ул яуызлыҡ, ләкин һәр кемгә кәрәкле яуызлыҡ.

**(Сократ).**

Намыҫлы, әммә ҡыҫҡа ғүмер оятһыҙ, әммә оҙон ғүмерҙән өҫтөн тора.

**(Эпиктет).**

Еңә алмаған ҡаршылыҡҡа ҡаршы сыҡма.

**(Аттила).**

Никах - йоланың яртыһы ғына, ҡалған яртыһы - түҙемлек.

**(Махома).**

Бер урындан икенсе урынға күсеп йөрөп үҙ-үҙеңдән ҡасып булмай.

**(Эрнест Хемингуэй).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт:**

**"- Хөрмәтле Уҡытыусым, - тип мөрәжәғәт итә бер ваҡыт уҡыусыһы Уҡытыусыһына, - мин тормошта үҙ маҡсатыңа өлгәшеүҙең ун принцибы бар тип ишеттем, тик улар тураһында бер ни ҙә белмәйем.**

**- Мин ул принциптарға һине өйрәтә алмайым, - тип яуаплай Уҡытыусы. - Әммә ул принциптарға өйрәтә ала торған кешеләрҙе беләм...**

**- Кемдәр һуң улар? - тип һорай уҡыусы.**

**- Тәүге өс принципҡа һине бала, ҡалған етәүһенә уғры өйрәтә аласаҡ, - ти Уҡытыусы аптырап ҡалған уҡыусыһына. - Эйе, беренсенән, баланан һин һис ниндәй сәбәпһеҙ ҡыуанырға, икенсенән, бер минут та тик ултырмаҫҡа, өсөнсөнән, теләгәнеңде ҡысҡырып һәм ныҡышмалы талап итергә өйрәнерһең.**

**- Ярай, хөрмәтле Уҡытыусым, - ти уҡыусы,- ә уғры мине нимәгә өйрәтә ала һуң?**

**- Беренсенән, эшеңде йәшерен эшләргә, икенсенән, әгәр эшеңде бер төн эсендә тамамламаһаң, уны икенсе төндә лә дауам итергә, өсөнсөнән, бер юлда йөрөгән дуҫтарыңды һәм иптәштәреңде хөрмәт итергә, дүртенсенән, маҡсатыңа өлгәшеү өсөн ғүмереңде лә бирергә, бишенсенән, бар булған нәмәңде ябай ғына булһа ла яңыға алмаштырырға ҡурҡмаҫҡа, алтынсынан, бер ниндәй ҡаршылыҡтар алдында ла ҡаушап ҡалмаҫҡа, етенсенән, үҙ эшеңә тоғро ҡалырға өйрәтер".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.**

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Баш мөхәррир урынбаҫары** 246-03-24
**Бухгалтерия** 246-03-23
**Хәбәрселәр** 252-39-99

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 23 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4587
Заказ - 521/03